Р.Ғ.Аҙнағолов

# *Жәлил Кейекбаев лекциялары*

Өфө - 2006

Р.Ғ.Аҙнағолов

***Жәлил Кейекбаев лекциялары***

(“Төрки телдәрҙең сағыштырма грамматикаһы”
курсы буйынса)

Өфө - 2006

УДК 821. 512. 141. 09
ББК 83.3 (2 Рос-Баш)
А 30

Аҙнағолов Р.Ғ. Жәлил Кейекбаев лекциялары. (“Төрки телдәрҙең сағыштырма грамматикаһы” курсы буйынса”). - Өфө: БашДУ, 2006.

Китапҡа Башҡорт дәүләт университетының профессоры, арҙаҡлы ғалим Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың “Төрки телдәрҙең сағыштырма грамматикаһы” курсы буйынса һөйләгән лекциялары тупланды. Улар башҡорт бүлегендә уҡыусы студенттар һәм, ғөмүмән, төрки телдәрҙең үҫеше, тарихы менән ҡыҙыҡһыныусы аспиранттар, ғалимдар өсөн файҙалы ҡулланма буласаҡ.

Яуаплы редакторы: профессор М.В.Зәйнуллин

© Аҙнағолов Р.Ғ., 2006
© Башҡорт дәүләт
университеты, 2006

## Исемдәре унаң мәңгелек

### *1.Ғалим Ж.Ғ.Кейекбаев*

Төрки тел ғилемендә һәм, ғөмүмән, Урал=Алтай тел ғилемендә аксиоматик һәм логик эҙмә=эҙлелек терияһын кем иң тәү асҡан? Әлбиттә, мәшһүр ғалим Жәлил Кейекбаев. Тел ғилемендә ҙур ҡаҙаныштарға тиң был теория грамматик билдәлелек һәм билдәһеҙлек категориялары тип атала. Жәлил ағай тел ғилемен метематика кеүек үк теүәл фән тип иҫәпләй. Үҙенең был теорияһын ғалим аксиома тип ҡарай. Нимә ул аксиома? Бына унаң аңлатмаһы; дөрөҫлөгө шикһеҙ булып, бүтән берәй теорияны иҫбатлау өсөн нигеҙ итеп алына торған ҡағиҙә.

Логик эҙмә=эҙлелекте, фекер йөрөтөүҙең теүәллеген телдә, аралашыу телмәрендә нимәлә күреп була? Тамамланған, теүәл, аныҡ фекерҙе бары тик һөйләм аша бирергә мөмкин. Һөйләм - синтаксик берәмек. Фекерләүҙең теүәллеге эйә менән хәбәр бәйләнешендә сағыла. Әммә телдең ҡоролошон, эске тәбиғәтен морфологиянан, фонетиканан, лексиканан , стилистиканан башҡа күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Эйә менән хәбәр морфологик аспектта исем менән ҡылым һүҙ төркөмдәрен тәшкил итә. Тимәк, исем менән ҡылым телдең төп һүҙ төркөмдәре, ә эйәне(исемде) асыҡлаусы, хәбәргә(ҡылымға) мөнәсәбәтле һүҙҙәр - икенсе пландағы, телмәрҙе биҙәүсе, матурлаусы, аныҡлаусы, тултырыусы, хәлләүсе һүҙ төркөмдәре.

Икенсе пландағы һүҙ төркөмдәре ярҙамында телдең тәбиғәтен, ҡоролош ҡанундарын, законсалыҡтарын асып булмай. Телдең динамикаһын, үҫешен, үҙгәрешен һәм үҫеш ҡанундарын, төҙөлөш ҡалыптарын фәҡәт унаң төп һүҙ төркөмдәрендә, йәғни исем менән ҡылым категорияларында күҙәтеп, өйрәнеп, ниндәйҙер бер асыҡ системаға һалып була.

Телдә билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһы исемдәрҙең килеш системаһында, ҡылымдарҙың шаһитлы һәм шаһитһыҙ заман формаларында сағылыш таба. Телдәрҙең үҫеш ҡалыптары бер- береһенә ҡәрҙәшлек мөнәсәбәте билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһына нигеҙләнә. Ул телдең аксиоматик һәм логик математик нигеҙе булып тора. Һүҙ үҙгәртеүсе, һүҙ яһаусы ялғауҙарҙағы һәм ҡылым формаларындағы өндәрҙең үҙгәреше телмәр теорияһына бәйләнгән. Теге йәки был өндөң икенсе өнгә күсеүе, һүҙҙең төрлө урындарында(тамыр, нигеҙ, ялғау) төрлөсә үҙгәреүе телдәге законсалыҡтарға нигеҙләнә. Ана шул тел тәбиғәтендәге ҡанундарҙың береһе һәм иң мөһиме булып билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһы һанала. Тел күренештәре аша телдәрҙең бер - береһенә ҡәрҙәшлеген асыҡлап була.

Билдәле булыуынса, башҡорт теле яҙмаһы йәш, бары тик Октябрь революцияһынан һуң (русса: младописьменные языки) барлыҡҡа килгән телдәр иҫәбендә йөрөнө. Ғилми әҙәбиәттә бары тик рус теленең яҙмаһы, тарихы боронғо, тип күрһәтелә киленде. Минеңсә, ошо уйҙырманы, ялған тезисты юҡҡа сығарыу өсөн ул урал-алтай телдәренең боронғолоғон һәм бер-береһенә ҡәрҙәшлеген ғилми күҙлектән тикшереүҙе маҡсат итеп ҡуйғандыр. Эпослы халыҡ - теленең тарихы, яҙмаһы бик тә боронғо булған халыҡ. Ана шул

боронғолоҡто, телдең, этнокультураның тәрән тамырҙарын бер тел миҫалында, башҡорт теле миҫалында ғына асып биреп булмай. Быны Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаев бик яҡшы белгән. Шуға күрә башҡорт телен дөйөм урал-алтай телдәре системаһында ҡарай, бер иш законсалыҡтарын, ҡәрҙәшлек мөнәсәбәттәрен байҡай. Теге йәки был телдең боронғолоғона материалды уның диалекттары бирә. Башҡорт теленең өс диалектында ла болғар , мадьяр, алтай, иран һ.б. телдәрҙең фонетик, морфологик, лексик һыҙаттарын күҙәтергә була.Туған телдең тәбиғи тамырҙарын иҫбат итеү донъя телдәре системаһында сағыштырма-тарихи планда эҙләнеү, тикшеренеү аша ғына мөмкин. Быны проф. Ж.Ғ.Кейекбаев бик яҡшы күҙ алдына килтергән.

Урал-алтай телдәренең ҡәрҙәшлеген иҫбат итер өсөн өр-яңы концепция, методология уйлап табыу көн үҙәгенә ҡуйыла. Кәрәк тирәкте йығa тигәндәй,Ж.Ғ.Кейекбевтың билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһы ана шунан килеп сыҡҡан икәне һәр кемгә билдәлелер. Шуны ла әйтергә кәрәк: һәр теория, концепция үҙенең үҫтерелешендә быға тиклем билдәле булған законсалыҡҡа таяна. Мәҫәлән, ҡылымдарҙың шаһитлы һәм шаһитһыҙлыҡ күренеше билдәлелек һәм билдәһеҙлек теорияһына нигеҙ итеп алына.

Ошо теорияға таянып, башҡорт телен һәм уның диалекттарын нигеҙ тел материалы итеп алып, Ж.Ғ.Кейекбаев “Урал–алтай тел белеменә инеш”, “Төрки телдәрҙең сағыштырма грамматикаһы”, “Урал–алтай телдәренең сағыштырма–тарихи грамматикаһы” кеүек хеҙмәттәрен ижад итте. Шулай уҡ алдан ошо хеҙмәттәрҙең киңәйтелгән проспекттарын-программаларын төҙөнө. Ж.Ғ.Кейекбаев үҙенең был бик тә актуаль хеҙмәттәре буйынса беҙгә, ул замандағы студенттарға лекциялар һөйләне. Һөйләне тип әйтәм, сөнки ул дәрестә бер ҡасан да конспект-маҙар ҡулланманы. Уның лекцияларын мин һүҙмә-һүҙ яҙып барҙым. Шуларҙың “Төрки телдәрҙең сағыштырма грамматикаһы” тигән өлөшөн айырым брошюра рәүешендә баҫтырып сығарырға әҙерләнем. Ғалимдың тыуыуына 95 йыл тулыу көндәре алдынан ул китап донъя күрер тип уйлайым.

## *2. Ж.Ғ.Кейекбаев –роман оҫтаһы*

Әҙәбиәттең байлығы ҙур панораманы сағылдырған әҫәрҙәре – романдары менән билдәләнә. Башҡорт әҙәбиәтендә роман жанры яҙыусы Ж.Ғ.Кейекбаевҡа тиклем ни бары дүрт-биш әҫәр менән генә йәшәп килә ине. Мәҫәлән: Афзал Таһировтың “Һалдаттар”ы (1932-1933), “Ҡыҙылгвардеецтар”ы (1935), “Ҡыҙылармеецтар”ы (1936), Дауыт Юлтыйҙың “Ҡан”ы (1933,1936), Имай Насыриҙың “Күҙәй”е (1936). Шуны ла әйтергә кәрәк: башҡорт совет романы жанрына нигеҙ һалыусы Ғәйнән Хәйри үҙенең “Боролош” романын 1928 йылда тамамлай, әммә ул әҫәр 1967 йылда ғына донъя күрә.

Был романдарҙың барыһы ла – эпизодик характерҙағы әҫәрҙәр. Һәр хәлдә уларҙы юғары художестволы әҫәрҙәр тип әйтеп буллмай. Яҙыусыларҙың был жанрҙа ижад итеү тәжрибәһе лә самалыраҡ буғандыр, күрәһең. Шуға күрә Жәлил Кейекбаев яңы типтағы роман жанрын тыуҙырыуға ҙур әҙерлек менән

килә. Үткәндәрҙән һәбаҡ алып, халыҡтың йәшәү рәүешен ныҡлап өйрәнеп, башҡа милләттәрҙең эпик әҫәрҙәренә ентекле күҙ һалып, Жәлил ағай үҙенең “Туғандар һәм таныштар”романын ижад итә. Яҙыусы үҙенең әҫәрендә халыҡ образын тыуҙырыуға барлыҡ ижад көсөн, егәрен һала.Ил тигәндең кеме юҡ. Ана шул “кем”дәр йәшәгән осорҙоң социаль йөҙөн асып биреү, ил тигән дөйөм мөхитте, шул аренаны тыуҙырыусы, булдырыусы дөйөмләштерелгән халыҡ образын бөтә яҡлап асыу өсөн уның шул осорға хас йәшәү рәүешен, ғөрөф-ғәҙәт, йола тәртиптәрен йәғни этнокультураның бай сараларын сағылдырыу яҙыусының төп маҡсатылыр. Билдәле булыуынса был әҫәр 1946 йылда тамамлана. Иғтибар итегеҙ: 1946 йыл. Башҡорт әҙәбиәте был осорҙа ниндәй кимәлдә була? Әҙәбиәттең үҫешен билдәләүсе проза жанры был осорҙа телгә алырлыҡ ниндәй әҫәрҙәр менән һыҙатлана? Ошо һорауҙарға аныҡ яуап алыу Жәлил Кейекбаев ижадының башҡорт әҙәбиәте өсөн ни тиклем ҙур ҡаҙаныш икәненә инанабыҙ.

Ҙур ғалим, әҙәбиәт белгесе Әнүр Вәхитовтың билдәләүенсә, был осорҙа башҡорт прозаһында әллә ни ҡаҙаныштар төҫмөрләнмәй. Уның тикшеренеүҙәренән бер өҙөк килтерәм:

“Утыҙынсы йылдарҙың аҙағы әҙәбиәтебеҙҙә ауыр осор булды. Башҡорт совет әҙәбиәтен башлап ебәреүҙә, уны ойоштороуҙа һәм артабан үҫтереүҙә ҙур хеҙмәт күрһәткән бик күп яҙыусыларҙың, шағирҙарҙың, драматург һәм тәнҡитселәрҙең ижади эштән ситләтелеүе әҙәби процестың аҡрынайыуына, бигерәк тә прозаның тоткарланыуына килтерҙе. Ана шуның өсөн дә был осорҙа оҙон ун йыл буйы тиерлек күләмлерәк әҫәрҙәр бик һирәк сыҡты. Улар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. С.Агиштың “Егеттәр”е менән “Мәхмүтов”, А. Карнайҙың “Йәшлек” һәм “Беҙ ҡайтырбыҙ” повестары, Ғ.Ғүмәрҙең хикәйәләре – ул дәүерҙең ижади йөҙөн билдәләүсе әҫәрҙәр булды. Ә инде һуғыш осоронда Ж.Кейекбаевтың “Зөбәй Үтәғолов” тигән документаль повесынан башҡа ҙур күләмле әҫәр булманы…”

Бына шуға күрә лә Жәлил Кейекбаевтың “Туғандар һәм таныштар” романы башҡорт әҙәбиәтен артабан үҫтереүгә ҙур өлөш индерҙе. Әҫәрҙе әҙәбиәтебеҙҙең ҡаҙанышы, роман жанрын ижад итеү өлгөһө тип атап булалыр, минеңсә. Телсе ғалим булараҡ, халыҡтың бай рухи мираҫын ныҡлы үҙләштергән яҙыусы булараҡ, ул юғары художестволы әҫәр ижад иткән. Ул хәл-ваҡиғаларҙы һөйләп сыҡмай, ә һүрәтләй; ер-һыу менән бәйләнешле урындарҙың тасуирламаһын түгел, ә тәжрибәле рәссам һымаҡ картинаһын бирә. Мәҫәлән, этнокультурабыҙҙың бер генә берәмегенә туҡталып үтәйек.

Жәлил Кейекбаев им-томға ҡағылышлы ғөрөф-ғәҙәт ҡанундарын бер урынға туплап, дөйөмләштереп һүрәтләй. Ғәриф старостаның аты сирләп китә. Был атты ул Ҡатай яғынан алып ҡайта. Авторҙың һүрәтләүенсә, был ат ябай ат түгел, ә “нәҙек билле, киң яурынлы, ялбыр яллы, аҡ бәкәле, яра-ҡашҡа ерән бер һәүерек” ине. Әммә ерәнсәй ерһей. Мал да үҙенең тыуған яҡтарын һағына, күрәһең. Ерәнсәй ашауҙан ҡала. Уны төрлөсә әмәлләп ҡарайҙар. Әбей-һәбейҙәр хайуандың сирләп китеүен төрлөсә юрайҙар. Ошо урында беҙ малға ҡағылышлы сирҙәрҙең исемдәре менән танышабыҙ: “йылан ҡараҡ”, “күҙегеү”, “төкө”, “йылан саҡҡан”, “сысҡансыҡ”, шулай уҡ “андыҙ бар ерҙә ат үлмәҫ” тигән әйтемде лә осратабыҙ. Бының менән яҙыусы халыҡтың йәшәү рәүешендә

ныҡлы урын алған бай традицияларын, “әмәл-таҡытын” сағылдырырға тырышҡан.

Ж.Кейекбаевтың “Туғандар һәм таныштар”романының теле ғәжәп бай. Унда әҙәби тел һүҙлектәрендә осрамаған һүҙҙәргә, фразеологик берәмектәргә, мәҡәл-әйтемдәргә юлығабыҙ. Ана шуларҙың ҡайһы берҙәренә аңлатма биреп ҡарайыҡ.

Бүлкәт: Тау бүлкәттәре араһында тәрән уялар бар.

Тумалаҡ: тумалаҡ юл – Уя эсенән киткән тумалаҡ юл тау башына, һыртҡа, алып менә.

Сытыр-сотор: ваҡ ҡыу ағас - Һыу һөрөп килтергән ағас, сытыр-сотор йәйҙең йәй буйы лапы булып ята.

Ҡыла: йылғаның төп үҙәндән айырылған тармағы – Ул (Үҙәште)…ҡылаларға, йырындарға тармаҡлана.

Йәүләү: маташыу, тырышыу, күҙ уңында тотоу – Баҡтиһәң, улар Ташбаҡкан ауылының урманын алырға йәүләгәндәр икән.

Ҡағыҙлатыу: ҡағыҙлаштырыу, ҡағыҙға теркәп ҡуйыу, рәсмиләштереү- …эш ҡағыҙлатыуға барып еткәс,киткән ғауға, ыреш-талаш.

Ик: яй, ыңғай, ыҡ – Ләкин старшина Ташбаҡкан ауылының ҡарттарын иккә килтерә алмаған.

Сусаҡ: сусаҡ битле (бит алмалары ослайып торған)-… ялтыр ҡара сусаҡ битле бер бәндә.

Ләс: һыуланып тороу-… уның күҙе ләс.

Яра: яра-ҡашҡа – яра-ҡашҡа ерән бер һәүерек алып ҡайтты.

Бауырһыу: сапсыныу, тыпырсыныу – Санаға еккән саҡта ерәнсәй, йөрәге түҙмәй, бауырһып торор ине.

Һәрәпсе: ялағай -… Уның һәрәпселәре ерәнсәйҙе маҡтап бөтә алманылар.

Сумма: тәрән ҡар, көрт - Әх, менеп, суммала бүре һуғырға.

Баш сәнсеү: башты бер урында тотоу – Ул(ерәнсәй), бер нәмә лә ашамайынса, ыңғырашып, күҙе һөҙөлөп, башын сәнсеп бер урында тик тора торғайны.

Төкө: малдың бөйөрө шешеп ауырыуы - Әллә төкө бултымы икән? Улай тиһәң, бөйөрөндә бер ҙә шешкән-ниткән ере күренмәй.

Таҡыт: әмәл-таҡыт (им-том) – Аптыраҡ инде хәҙер, әмәл-таҡыт итеп тә ҡарағайным.

Тос: ашлыҡ –Тирмәндә тос тарттырған кеүек, ти.

Ылғы: ылғый – Ылғы урман менән ҡапланған.

Иңкелеү: ауыу, ҡолау -… бер-береһенең өҫтөнә иңкелеп торған тауҙар.

Ыуаҡайланмау: ваҡайланмау – Баһау ыуаҡайланманы.

Мөҙәһенмәү: риза булмау – Уға ла мөҙәһенмәһә, йылҡы нәҫеленән бер баш һайлап алһын…

Һоғон: һоғон ите – Шаһиәхмәт тә һоғон ите өләште…кизеүләп ит һоғондороу китте.

Баҙынмау: баҙнат итмәү - …һүҙ ҡыҫтырырға баҙынманы.

Һын: уй, сәбәп, маҡсат - … мираҫ тураһынан һине ризалаштырып ҡуяйыҡ тип саҡырған һын әле һеҙҙе бөгөн.

Ҡара: ҡара күреү (берәй әйбер һатып алыу) -Аҡсалы кәсеп булмағас, әлеге, ни ҡара күрәйем тиһәң дә, шул бәрәкәтле малға барып тотонаһың.

Һаҡаратлау:(әрләү, тиргәү) – Шаһиәхмәт эстән энеһен һаҡаратлай ине.

Түгәрәлеү: табын тирәләй түңәрәкләп ултырыу- түгәрәләп аш ашау.

Кәжеү: өгөү, өгөтләү - … әйләнгән һайын кәжеп, өгөп торҙо.

Төнәгөн: төнә, күптән үткән көн.

Атырғыс:(уйын төрө) –Малайҙар соҡор туп һәм атырғыс уйнай торҙолар.

Ыңырбау: үңербау – Елберҙәп торған ыңырбау һәм бәйләместәр майҙанға уғата йәм бирҙе.

Хәләү: - Мастерҙар көсөргәнеп быяла өрәләр, бәүелткәндә хәләүҙәр ялт-йолт күренеп ҡалалар, әҙәм бейеклеге оҙон-оҙон быяла ҡыуыҡтары теҙелә тора.

Тутырмыш: тултырма – Уныһы тултырмыш һымаҡ шөҡәтһеҙ йыуан.

Һарһылтыу: өҙҙөрөү –Төрлө тауыштар менән һарһылтып, сут-сут һайраған һандуғастар ҡалын урманға һоҡландырғыс йәм бирҙеләр.

Артаҡ:иркә, наҙлы бала – Атаң артағы түгел дә баһа.

Көшөффф:ымл., оноҡш.һ.: өшкөрөү.

Шумбырҙау: һыуға сумғанда сыҡҡан тауыш – Ҡама… шумбырҙап кисеүҙең түбән яғындағы ятыуға барып сумды.

Жәлил Кейекбаевтың “Туғандар һәм таныштар” романының теле һәм стиле ныҡлап, ентекләп, иғтибарлап өйрәнеүҙе талап итә. Ҡасандыр ғалим үҙенең бер сығышында башҡорт теленең һүҙ байлығы һүҙлектәрҙә күрһәтелгән һан менән генә сикләнмәй, кәм тигәндә ике йөҙ илле мең тирәһе булырға тейеш тип әйткәне хәтеремдә. Уның һүҙҙәренә мин дә ҡушылам. Бөгөнгө һүҙлектәребеҙҙә күпме һүҙ тупланған? Булмаһа, һүҙлектәргә күҙ һалайыҡ.

“Башҡорт теленең һүҙлеге”55000 һүҙ һәм фразеологик берәмек, шулай уҡ фән, техника, сәнғәткә һ.б. ҡараған махсус терминдар, диалектизмдар һәм иҫкергән һүҙҙәр тәкдим итә.

“Башҡортса-русса һүҙлек”32000 һүҙ тип яҙып тора ла, аннотацияһында 40000-дән ашыу һүҙ һәм тотороҡло һүҙбәйләнештәрҙең тәржемәһе бирелде тип ышандырырға итә.

Быларҙың икеһе лә норматив һүҙлектәр. Башҡорт әҙәбиәтенең һүҙ байлығы ана шуларҙа сағыла. Быларҙан күренеүенсә, бөгөнгө көндә беҙ 55000 һүҙ һәм фразеологик берәмектәр менән шөкөр итәбеҙ.

Башҡорт лексикографияһы өлкәһендә норматив булмаған һүҙлектәр ҙә бар. Был йәһәттән “Башҡорт теленең диалекттары һүҙлеге”н атап китергә мөмкин. Унда һүҙҙең һаны анығ күрһәтелмәгән. Сама менән алғанда, был һүҙлек 20000 һүҙҙең мәғәнәһе менән таныштыра. Шуны ла әйтергә кәрәк: бындағы байтаҡ диалектизмдар “Башҡорт теленең һүҙлеге”нә алынған.

Һәр яҙыусы үҙенең әҫәре менән беҙҙең әҙәби телдә булмаған яңы һүҙҙәр алып килә. Шулар иҫәбенә туған телдең һүҙлек составын, һүҙ ҡаҙнаһын байытырға мөмкин түгелме ни? Жәлил ағайҙың васыятына битараф булмайыҡ.

### *3. Яҙмышымдың яҡты бер миҙгеле*

Кеше яҙмышының яҡты миҙгелдәре бик һирәк булалыр. Ана шул “һирәк”тәрҙең береһе итеп студент сағымда проф. Ж.Ғ.Кейекбаевты күрә йөрөүемде, уның һөйләгән лекцияларын тыңлау бәхетенә ирешеүемде әйтеп китер инем. Үҙе менән ҡалын ғына портфель йөрөтһә лә, дәрес ваҡытында бер ҡасан да конспект-маҙар ҡулланманы, кафедра артына барып баҫманы. Аудиторияға килеп инеү менән алғы парталарҙың береһенә аяғын һалындырып ултыра ла лекцияһын һөйләй башлар ине, миҫалдарҙы таҡтаға сығып яҙа барыр ине. Һәр кемдең күҙенә ҡарап, бәхәс алып барған һымаҡ итеп үткәрә ине дәресен. Ҡайһы саҡта уның дәресенә башҡорт теле кафедраһындағы уҡытыусылар, аспиранттар инеп ултыра торғайны. Үҙенең лекцияһын бик тә кинәнеп һөйләр ине. “Һәт нисек ул! Төпсөнә китһәң, шулай ул!”- тип үҙенең асышына ҡыуанысын да йәшермәй ине. Дәрес башында таҡтаға миҫалдар (мәҫәлән, минең – минен, ҡала баҡсаһы – ҡаланың баҡсаһы, китап бите – китаптың бите һ.б.) яҙа ла, шуларҙың араһындағы айырманы студенттарҙан һорай торғайны. Ул уйлағансараҡ яуап бирһәң, “Бының иҫе дөрөҫ. Мал сығыр бынан”, - тип баһаһын да әйтер ине.

Һүҙ ыңғайында шуны ла әйтеп үтәйем: зачет, имтихан ваҡытында ҡайһы бер студенттар шым ғына, йәнәһе Жәлил ағайға күрһәтмәй генә парта аҫтынан үҙҙәренең яҙғандарын күсерһәләр, “Энем(йәки мырҙам), ниңә парта аҫтынан ҡарап күсерәһең, күҙеңде боҙаһың бит. Партаның өҫтөнә һалып күсер.Башҡаларға ла әйтәм:лекция ваҡытында яҙғандарығыҙҙы ҡарап алырға мөмкин”,-тип көсөргәнеште кәметер ине. Сөнки тәжрибәле педагог булараҡ теге йәки был теманы кемдең нисек үҙләштергәнен ул былай ҙа белә бит инде. Шулай бер мәлде бер студент күсереп яҙғанын уҡыны ла биш баһаһы алып сығып китте. Ә мин, яҙғаныма ла ҡарап тормайынса, һөйләнем-һөйләнем дә, уҡытыусымдың ниндәй баһа ҡуйырын көтөп ултырам. Жәлил ағай ниңәлер миңә дүрт баһаһын ҡуйҙы. Мин аптырап ҡалдым:”Барыһын да дөрөҫ һөйләнем дә инде. Күсермәнем. Ә теге күсереп яҙғанын уҡыған студентҡа биш ҡуйҙығыҙ”,-тип үҙемде яҡлап һүҙ әйттем. Жәлил ағай көләмһерәп мине тыңланы ла:”Ул студентҡа башҡорт теле лә, урал-алтай телдәре лә - береһе лә кәрәкмәй. Зачеткаһында “биш” түгел, “дүрт”тәр ҙә бик һирәк. Исмаһам, минән “биш” алып, күңеле күтәрелеп, һәйбәтләп уҡый башлар, тип уйлайым. Ә “биш”те һиңә, мырҙам, ваҡыт үҙе ҡуйыр”, -тигәйне.

Ваҡыт үҙе ҡуйыр… Ҡыҙыҡ яуап. Ошондай уҡ яуапты мин Мәскәүҙә аспирантурала уҡығанда, төрки телдәре буйынса имтихан тапшырғанда профессор Әхнәф Әхмәт улы Юлдашев ағайҙың ауыҙынан да ишеткәйнем. Шуға әле һаман да уйланып ҡуям: ваҡыт һынауын тапшыра алдыммы икән?

Проф. Ж.Ғ.Кейекбаев бик тә кешелекле, бик тә кеселекле булды. Бер шулай Фрунзе урамы буйлап Тарих, тел, әҙәбиәт институтына китеп барам. Институт элек Матросов паркы янындағы бер йортта ине. Был ваҡытта мин бишенсе курста уҡып йөрөйөм, диплом эшен яҙам. Институтҡа юлланыуымдың маҡсаты: диплом эшемә рецензент белешеү һәм артабан аспирантураға урын бармы-юҡмы икәнен аныҡлау. Шул саҡ юлда ҡаршыма Жәлил ағай осраны ла:”Ни хәл, мырҙам? Ҡайҙа юл тоттоң?”-тип һораны. Хәлемде һөйләп бирҙем. Ул мине тыңлап бөттө лә: “Институтҡа барып тормаһаң да була. Һинең мәсьәләне хәл иттек инде”,-тип минең арҡамдан ҡағып ҡуйҙы. Рәхмәт әйтемме икән, әллә әйтмәнемме икән? Хәҙер асыҡ ҡына итеп хәтерләй алмайым. Мин бик ныҡ тулҡынланғайным, киләсәгемде хәстәрләп йөрөһөнсө әле?! Уның өсөн мин кем генә инде? Бына шуның өсөн дә Жәлил ағайҙы, яҙмышымдың яҡты бер миҙгеле итеп, һаман да хәтеремдә һаҡлайым.

## *4.Илдең данын ишәйтеүсе шәхес*

Тормошта кешеһенә ҡарап илде таный торған ғәҙәт бар. Ауылыңдан ситкәрәк сығып китһәң, һине, берәй ауылдашыңды телгә алып, һин шуның ауылынан инде әләйһәң, тип таныйҙар Бына ошо нигеҙҙә илде таныу төшөнсәһе ауылдан-ауылға, районда-районға, республиканан - республикаға, дәүләттән-дәүләткә тиклем киңәйә бара Был турала һүҙҙе мин юҡҡа ғына башламаным, сөнки минең һәм минең кеүек башҡа бик күптәрҙең уҡытыусыһы булған профессор Жәлил Киекбаев илде танытыусы, илдең данын ишәйтеүсе кешеләрҙең береһенән һанала.

Жәлил Киекбаев беҙҙең илебеҙҙә генә түгел, ә тел ғилеме өлкәһендә эшләүсе сит ил ғалимдарына ла ныҡ танылған, юғары эрудициялы, киң профилле ғалим.

Башҡорт дәүләт университеты студенты сифатында мин 1963-1968 йылдарҙа Жәлил ағайҙың уҡыусыһы булыу бәхетенә ирештем.

Бөгөнгөләй хәтеремдә профессор Жәлил Киекбаевтың дәрескә килеп инеүен түҙемһеҙлек менән көтәбеҙ, профессор тигәс, бер аҙ ҡурҡыңҡырап та ҡуябыҙ. Бына бер заман аудиторияға урта буйлы, киң генә яурынлы, һин дә мин ябай бер ағай килеп инде. Беҙ аптырабыраҡ ҡалдыҡ, профессор һүҙенең мәғәнәһен төшөнмәгәс ни, ниндәйҙер мөғжизә көтәбеҙ. Көткән «мөғжизә»беҙҙең ҡулында бер нәмә лә юҡ. Башҡа уҡытыусыларыбыҙҙың ҡулында йә портфель, йә китап, йә ҡалын дәфтәр булыр ине. Был ағай башҡалар кеүек кафедра артына ла барып баҫманы, килде лә алдағы буш торған партаның ситенә ултырҙы. «Мине, Жәлил ағай, тип йөрөтөрһөгөҙ, фамилиям Киекбаев, мин һеҙҙә шул-шул фәндәрҙән лекция уҡыясаҡмын, ә һеҙҙең менән дәрес барышында танышырмын», - тип тема буйынса лекцияһын һөйләй ҙә башланы. Беҙҙең ауыҙ асып тыңлап ултырғаныбыҙҙы күргәс, үҙенең һөйләгәндәрен өлгөрә алған тиклем яҙып барыу кәрәклеген, уларҙың әлегә китап булып сыҡмағанын әйтәһе итте.

Ул беҙгә «Башҡорт теленең фонетикаһы», «Башҡорт теленең орфоэпияһы», «Башҡорт һәм татар телдәренең тарихи грамматикаһы», «Төрки

телдәрҙең сағыштырма грамматикаһы», «Урал-алтай тел белеменә инеш» тип аталған предметтар буйынса лекциялар һөйләне. Был фәндәрҙең күбеһе беҙ университетҡа килгән йылдарҙа ғына уҡыу планына индерелгәйне. Уның лекциялары һәр ваҡытта йәнле, ҡыҙыҡлы һәм ижади уйланылған, фәнни асыштарға бай булыр ине. Тел ғилеменең бик ҡатмарлы законлыҡтарын да һәр кемгә етерлек итеп ябай ғына һүҙҙәр менән аңлата торғайны. Уҡытыусым Жәлил ағай Киекбаев һөйләгән лекцияларының үҙем яҙып барған конспектын һаман да ҡәҙерләп, зиһенемдә лә, дәфтәрҙәремдә лә уның төҫө итеп һаҡлайым.

Уның лекцияларын үҙем яҙып алған килеш китап итеп сығарырға булдым. Йөкмәткеһе яғынан был лекциялар ағайыбыҙҙың нәшер ителгән китаптарынан байтаҡ айырыла. Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: Жәлил ағайҙың китаптары беҙ тыңлаған курстар буйынса фәҡәт урыҫ телендә баҫылып сыҡты. Ә ул үҙенең лекцияларын беҙгә һис бер конспектһыҙ башҡорт телендә һөйләне. Был яҙмаларҙы баҫмаға биреп, университет һәм пединституттарҙың талиптарына ярҙам итмәксемен. Актуаллеге йәһәтенән был лекциялар тел ғилеме менән шөғөлләнеүсе ғалимдар өсөн дә бик ҡыҙыҡлы һәм фәһемле булыр тигән өмөттә ҡалам.

*Өҫтәмә һүҙ:* Атаҡлы башҡорт ғалимы, донъя тюркологияһында киң билдәле фән әһеле һәм талантлы әҙип, профессор Жәлил Ғиниәт улы Кейекбаевтың ғилми-теоретик һәм әҙәби мираҫы башҡорт филологияһы һәм төрки тел ғилеме тарихында айырым бер урын алып тора. Был тәбиғи, сөнки проф. Ж.Ғ.Кейекбаев хәҙерге заман башҡорт тел ғилеме мәктәбенә нигеҙ һалыусы шәхес булды. Уның хеҙмәттәренең фәнни әһәмиәте илебеҙ һәм донъя фәне өсөн баһалап бөткөһөҙ ҙур. Ж.Ғ.Кейекбаевтың ғилми һәм әҙәби ижады бик емешле булды: ул үҙенең сирек быуат ҡына дауам иткән ижад ғүмере эсендә тик лингвистик проблемаларға арналған 100-ҙән артыҡ хеҙмәт яҙҙы. Ул телсе ғалим булыу менән бер рәттән ҙур яҙыусы ла, ялҡынлы публицист та, оҫта педагог та, күренекле дәүләт эшмәкәре лә ине.

Әле бына уның элекке студенты, бөгөн Башҡорт дәүләт университетының башҡорт һәм дөйөм тел ғилеме кафедраһы профессоры филология фәндәре кандидаты, педагогия фәндәре докторы Р.Ғ.Аҙнағоловтың “Жәлил Кейекбаев лекциялары” тигән ҡульяҙмаһы менән танышып сыҡтым да уны айырым китап итеп баҫтырып сығарырға тигән фекергә килдем.

Был хеҙмәт бөгөнгө студенттарыбыҙ, ғалимдарыбыҙ өсөн файҙалы ҡулланма булыр тип ышанам.

М.В.Зәйнуллин,
Башҡорт дәүләт университетының БФЖ
факультеты деканы,
башҡорт һәм дөйөм тел ғилеме кафедраһы мөдире, филология фәндәре
докторы, профессор,
Башҡортостан Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты.

## ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕНЕҢ
## САҒЫШТЫРМА ГРАММАТИКАҺЫ

Аксиоматик һәм логик эҙмә-эҙлелек нигеҙенә ҡоролған математика фәндәренең теориялары кеүек, тел фәнен дә шул уҡ нигеҙгә ҡоролған ниндәйҙер бер теорияға индерергә мөмкин. Сөнки тел фәне лә һәм, ғөмүмән, телдәр ҙә хәҙерге көндә математика фәндәре рәтенә индерелә. Был хәл инде совет тел белемендә лә, шулай уҡ донъя тел белемендә лә бер ниндәй ҡаршылыҡ тыуҙырмай. Ләкин аксиоматик һәм логик математик нигеҙгә ҡороу һәм тел фәне өсөн яраҡлы булған теория үҙенсәлекле булырға тейеш. Сөнки математика фәндәре ҙур цифрҙар урынына хәрефле символдар менән эш итә. Мәҫәлән: *а + в; а - в* һ.б. Был инде ҙур цифрҙарҙан ҡотолоу осоп эшләнә.

Ә тел фәнендә бындай хәл мөмкин микән? Уйлағыҙ әле? Бигерәк тә телдәрҙе сағыштырма тарихи планда өйрәнгәндә, абстракция символдары менән эш итеү мөмкин түгел. Төрки телдәрендә һәм, ғөмүмән, урал-алтай телдәрендә нимәне һуң, аксиома итеп алырға мөмкин? Был телдәрҙә грамматик билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияларын аксиома тип ҡарарға мөмкин. Мәҫәлән: а) **килеш системаһында**: *ул хат яҙҙы. Ул хатты яҙҙы. Ул бала ҡарай. Ул баланы ҡарай. Ҡала баҡсаһы. Ҡаланың баҡсаһы*; б) **ҡылым системаһында**. Күпселек төрки телдәрҙә һәм башҡа күпселек урал-алтай телдәрендә билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы ҡылым системаһында шаһитлыҡ һәм шаһит түгеллек менән белдерелә: *Ул яҙҙы. Ул яҙған ине.*

Билдәлелек һәм билдәһеҙлек ҡылым системаһында йәнә ышаныс ҙур булыу йәки эшләгән эшкә ышаныс аҙ булыу мәғәнәһен белдерергә мөмкин. Төрки телдәренең бөтәһендә лә билдәле киләсәк заман бар: *аласаҡ, киләсәк* һәм билдәһеҙ заман бар: *алыр, килер*. Күп осраҡта был ике заман формаһын бер--береһе менән алмаштырып булмай, сөнки билдәһеҙ киләсәк замандың диапазоны ҙур.

Халыҡ мәҡәлдәрендә был бик асыҡ сағыла: *ялҡау ҡоторһа, байрамда эшкә барыр; иҫәр ҡоторһа, ҡойоға ҡармаҡ һалыр*. Быны киләсәк замандың -*саҡ, -сәк* формаһы менән алмаштырһаң, мәҡәлдең мәғәнәһе тарайыр ине.

Ҡылымдарҙың хәҙерге заман формаһы эшләнәсәк эшкә ышаныс күп булыуҙы йәки аҙ булыуҙы белдерә: *күрәм - күрәмен, алам – аламын.*

Билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы төрки һәм урал-алтай телдәрендә бик күп төрлө сағыла. Яҡут телендә ике төрлө билдәһеҙ төшөм килеш бар: 1) аффикслы; 2) аффиксһыҙ. Угро-фин телдәренә ингән эстон телендә лә ике төрлө билдәһеҙ төшөм килеш бар: аффикслы һәм аффиксһыҙ. Ләкин шуныһы иғтибарға лайыҡлы: эстон телендәге аффиксһыҙ билдәһеҙ төшөм килеш һөйләмдең эйәһе булмаған саҡта, икенсенән, һөйләмдәге ҡылым бойороҡ формаһында килгәндә ҡулланыла.

Мәҫәлән,

1. Osta raamat (китап ал)
2. Ostati raamat (купили книгу)

Аффикслы билдәһеҙ төшөм килешкә миҫалдар:

1. Ma ostin raamatut (я покупал книгу) (үткән заман)
2. Ma ostin raamatu (я купил книгу)

Эстон телендә ҡылымдың зат формаһы менән килештең тура тултырыусыһы үҙ-ара бик нығ бәйләнгән. Әгәр тура тултырыусы аффикслы билдәһеҙ төшөм килештә торһа, хәҙерге заман ҡылым формаһы ла

билдәһеҙлекте белдерә (рус телендәге *несовершенный вид* мәғәнәһенә тап килә). Сағыштырығыҙ: *я прочту* (уҡырмын), *я сделаю* (эшләрмен). Әгәр инде тура тултырыусы билдәле төшөм килештә торһа, ҡылым формаһы ла билдәлелекте белдерә (рус телендәге *совершенный вид* мәғәнәһенә тап килә).

Төрки телендә алды, яҙҙы, килде тибындағы ҡылымдарҙа *-ы, -е* элементы билдәлелек күрһәткесе булып тора.

Оғуз төрки телдәрендә (төрөкмән, әзербайжан, төрөк, гагауз) *-ы, -и* тартынҡы нигеҙ өсөн билдәле төшөм килеш аффиксы. Шулай итеп, төрки телдәрендә *-ы, -и* элементтары, беренсенән, һуҙынҡыға бөткән һүҙҙәр өсөн билдәле төшөм килеш аффиксы. Был оғуз төрки телдәрендә, шулай уҡ айырым хәлдәрҙә башҡа төрки телдәрендә лә, икенсенән, *-ы, -и* элементы - яңғыҙ көйө тартынҡыға бөткән һүҙҙәр өсөн өсөнсө зат эйәлек аффиксы. Йәғни *–ы, -и* элементы - ике хәлдә лә билдәлелек күрһәткесе. Килеш аффиксы булғанда ла, өсөнсө зат аффиксы булғанда ла *-ы, -и* элементы төрки телдәрендә икеһе лә бер сығанаҡтан.

Был турала Ҡазан университетының профессоры В.А. Богородицкий бынан 60 йыл элек әйткән булған. Ләкин уның был дөрөҫ фекере юғалып ҡалған (В.А. Богородицкий «Введение в татарское языкознание», 1953. «Раздел падежной формы татарского языкознания» тигәнде «тюркское языкознание» тип аңларға кәрәк, сөнки элек төрки халҡын татарҙар тип йөрөткәндәр).

Венгр телендә үткән заман ҡылымдың билдәле формаһы *-а, -ә* аффиксы менән бирелә. Мәҫәлән: *o irta* (ул яҙҙы) - билдәле , *o irt* (ул яҙынды) - билдәһеҙ. Венгр телендә *-а, -ә* элементы бер үк ваҡытта өсөнсө заттың эйәлек аффиксы һәм үткән заман ҡылым өсөн билдәлелек күрһәткесе булып та йөрөй. Мәҫәлән:

| | |
|---|---|
| haz–йорт | low - ат |
| haza–йорто | lowa - аты (его конь) |

Телдәрҙе шул рәүешле сағыштырыу арҡаһында төҙөк бер структура булдырырға мөмкин. Венгр телендәге кеүек үк яҡут телендә лә тартынҡыға бөткән һүҙҙәр өсөн өсөнсө заттың эйәлек аффиксы булып *-а,* -э элементы ҡулланыла. Мәҫәлән: *ат* (конь) - *ат-а* (его конь).

Бөтә төрки телдәрендә *-ы, -и* элементы, билдәлелек күрһәткесе булараҡ өсөнсө заттың аффиксы функцияһын үтәү менән бергә, оғуз телдәрендә билдәле төшөм килеш аффиксы булып йөрөгән кеүек, яҡут телендә лә өсөнсө зат эйәлек аффиксын үтәүсе *-а,* -э элементы сыуаш телендә лә билдәле төшөм килеш аффиксы функцияһын үтәй (тартынҡыға бөткән һүҙҙәр өсөн). Мәҫәлән: сыуашса: *эве Иван-а пелеп* (мин Иванды күрмәнем), *выл пыл-а чийне* (ул балды ашаған). Шул рәүешле сыуаш телендә тартынҡыға бөткән исемдәрҙең билдәле төшөм килеш формаһы менән шул уҡ исемдәрҙең төбәү килеш формаһы тап килгән. Шул уҡ *Иван-а* формаһы *Иванга, Иванды* мәғәнәләрен бирә. Мәҫәлән: *Иван-а пырап* (Иванға барам).

Шулай итеп, сыуаш телендә билдәле төшөм килеш формаһы менән төбәү килеш формаһы контекста ғына айырыла.

Билдәлелек һәм билдәһеҙлек категорияһы сыуаш телендә бигерәк тә ҡылым сфераһында үҙенсәлекле сағыла. Мәҫәлән, шаһитһыҙ үткән заман формаһында ҡылым зат аффиксын ҡабул итмәй. Сағыштырығыҙ:

эпе илнё

эсе илнё

вал илнё

Сыуаш теленең үткән заман ҡылым формаларында бер ваҡытта ла зат аффикстары булмаған. Билдәһеҙлек менән бәйләнгән ҡылым формаһында зат аффиксы мәжбүри түгел.

Эстон телендә лә шул уҡ хәл. *-е* элементы тартынҡыға бөткән һүҙҙәр өсөн беҙҙең телдәрҙә лә билдәле төшөм килеш аффиксы формаһын үтәй, ләкин был хәл сикләнгән ваҡытты аңлатҡан хәлдәрҙә осрай: *1940-сы йылы* (билдәле төшөм килеш), *1940-сы йылды* (хәҙерге өҫтөнлөк иткән билдәле төшөм килеш) Ә һуҙынҡыға бөтһә, *-ны, -не* аффиксы ҡуйыла: *аҙна-ны, йома-ны, кисә-не* һ.б.

## ҠӘРҘӘШ ТЕЛДӘРҘЕҢ БАРЛЫҠҠА КИЛЕҮЕ

Ҡәрҙәш телдәрҙең грамматик төҙөлөшөндәге тарихи күренеш бик ҡатмарлы. Грамматик формаларҙың тарихи дөйөмлөлөгө тигән төшөнсәне грамматик формаларҙың төкмә - төк тап килеүе тип аңларға ярамай. Бында һүҙ ҡәрҙәш телдәрҙәге грамматик төҙөлөш ҡалыбының берҙәм булыуы тураһында бара. Бер мәғәнә аңлатҡан грамматик формалар төрлө аффикстар ярҙамында яһалырға мөмкин. Ләкин улар ҡәрҙәш телдәрҙең күбеһендә бер төрлө грамматик ҡалып менән яһала.

Грамматик ҡалыптарҙың берҙәмлегенә бер нисә миҫал:

| | |
|---|---|
| Татарса: агач-та | - эвенкисә: мо-ду |
| -\- агач-та+н | -\- мо-ду+к |
| -\- мин-дә | -\- мин-ду |
| -\- мин-дә+н | -\-мин-ду+к |
| башҡортса: ҡала-ға | ҡала-на+н |

Сығанаҡ килеш формаһы тарихи яҡтан да шулай һаҡлана: *ҡала+на,* сыуашса: *хула+на.*

Башҡорт телендә был тәбиғи хәл. Сөнки проф. Н.А. Баскаковтың классификацияһы буйынса сыуаш теле яңғыҙы ғына боронғо болғар теленән үҫкән. Ошо уҡ классификация буйынса татар, башҡорт телдәре ҡыпсаҡ-болғар төркөмөнә инә. Тимәк, башҡорт, татар телдәре ҡыпсаҡ-болғар элементтарынан төҙөлгән. Башҡорт һәм татар телдәрендә болғар теленең элементтары грамматикала ла, фонетикала ла һәм лексикала ла сағыла. Татар телендә (әҙәби теле һәм һөйләштәрендә) боронғо *ө* өнө бар: *бетте,* ләкин *бөтөү.*[*]

Сыуаш теленең беренсе ижектәге *ө* өнөнөң *е* өнөнә әйләнеүе эҙмә-эҙлекле күҙәтелә: *келте – көлтә, кёвенте – көйәнтә* һ.б.

Татарса *ҡала-да* тибындағы урын-ваҡыт килеш саф ҡыпсаҡ элементы. Бөтә төрки телдәрендә *ҡала-да,* тик башҡорт телендә *ҡала-ла* рәүешендә нығынып ҡалған. Күпселек төрки телдәрендәге *ҡала-да* формаһына *-н* элементы ҡушылып сығанаҡ килеш яһала: *ҡала-да+н.* Фин-уғыр телдәрендә лә сығанаҡ килештең яһалышы шул ҡалыпҡа тап килә. Мәҫәлән: *Linna-s* (ҡала-да), *linna-s+t* (ҡала-да+н) - эстон телендә; *йөңк-ә* (һыу-ҙа), *йөңк-ә+г* (һыу-ҙа+н)

[*] *Бында □□м артабан да ми□алдар теге й□ки был телде□ □□□би (я□ма й□ки □□йл□□ формалары) телен□н, диалекттарынан □□м □□йл□шт□рен□н килтерел□ (РА).*

- хант телендә.

Ҡәрҙәш телдәрҙең бөтәһе лә бик боронғо замандарҙа йәшәгән. Бер нигеҙ телдән айырылып тармаҡланып киткәндәр. Марксистик тел белеме ҡәрҙәш телдәрҙең барлыҡҡа килеүен түбәндәгесә төшөндөрә: «...бүленеүгә булған ынтылыш ырыу ойошмаһының нигеҙендә тамыр йәйгән булған. Был ынтылыш телдә айырма тыуа башлауға булған ынтылыш менән көсәйә барған. Сөнки телдә айырма тыуырға булған ынтылыш ырыуҙар биләгән территорияның киңлеге һәм уларҙың ижтимағи тормошо арҡаһында ҡотолғоһоҙ булған. Йәнле тел, үҙенең грамматик формалары менән ғәжәп ныҡ тотороҡло булһа ла, үҙгәрмәйенсә ҡалмай. Ырыуҙар йәшәгән территориялары яғынан бер-береһенән айырылыуы замандар үтеүе менән телдә айырма тыуыуға алып барған. Был хәл ырыуҙарҙың мәнфәғәттәре айырылыуын һәм уларҙың береһе икенсеһенән бойондороҡһоҙ булып йәшәүен килтереп сығарған» (Архив Маркса, Энгельса. Том 9. С. 79).

Ф. Энгельс үҙенең «Ғаилә һәм хосуси милектең килеп сығыуы» тигән хеҙмәтендә, Маркстың ошо фекерен ҡеүәтләп һәм артабан үҫтереп, Төньяҡ Америка индеецтарының тарихын тикшергән урында һәм шуларҙың өлгөһөндә ҡәрҙәш телдәрҙең бер дөйөм сығанаҡтан таралып китеп барлыҡҡа килеүе хаҡында түбәндәгесә яҙа: «...Диалект айырмалығы булған дөйөм тел уларҙың сығышы дөйөм булыуға миҫал булып тора. Төньяҡ Америка индеецтарының миҫалында беҙ башта дөйөм булған ҡәбиләнең киң материкка әкренләп таралыуын, ҡәбиләләрҙең бер-береһенән айырылып, халыҡтарға, бер нисә ҡәбилә төркөмөнә таралыуы, уларҙың телдәре бер-береһенә аңлашылмаҫлыҡ хәлде генә түгел, хатта тәүге берҙәмлектең бөтә эҙҙәрен күрәбеҙ». (Ф. Энгельс. 1953 йыл. 89-сы бит.)

Ҡәрҙәш телдәрҙең бер-береһенән айырылып китеп телдәре бер-береһенә аңлашылмаҫлыҡ хәлгә килеп үҙгәреүен беҙ алтай, урал-алтай телдәре ғаиләһендә һәм төрки телдәре миҫалында ла күрәбеҙ Төрки телдәре араһында был йәһәттән сыуаш һәм якут телдәре айырым урын алып тора. Сөнки улар хәҙерге көндә башҡа төрки халыҡтарына аңлашылмаҫлыҡ дәрәжәлә үҙгәргәндәр. Ғалимдарҙың фекеренсә, мәҫәлән, сыуаштар көнсығыштан Европа территорияһына беренсе башлап күсеүсе ҡәбилә булған.

Ырыу ойошмаһының нигеҙендә бүленеүгә булған ынтылыш ҡотолғоһоҙ тигән фекерҙе шул рәүешле аңларға кәрәк:

Боронғо ырыу ҡоролошо дәүерендә ырыуҙар һәм ҡәбиләләр йән иҫәбе артыу һәм шул арала яңы йәш ырыуҙар барлыҡҡа килеү арҡаһында даими рәүештә бер-береһенән айырылып, бүленеп, башҡа территорияға күсеп китер булғандар. Был процесс өҙлөкһөҙ, йәғни, һәр ваҡыт ҡабатланып торған. Замандар үтә килә башҡа территорияларға күсеп киткән ҡәбиләләрҙең дә йән иҫәбе артып торған. Улар үҙ сиратында йәнә яңы ырыуҙарға бүленгәндәр, башҡа ерҙәргә күсеп киткәндәр. Тәүге сығанаҡ ырыуҙар, айырылып сығып, башҡа территорияларға күсеп киткән ҡәбиләләрҙең телендә (диалектында ла) замандар үтә килә айырма тыуа башлаған. Ул айырма күбәйә барған. Иң тәүге сығанаҡтан айырылып киткән ҡәбиләләрҙең телдәрендә уларҙың һүҙлек фонды күберәк үҙгәрешкә бирелгән, сөнки улар төрлө географик шарттарҙа йәшәгән (тау, урман, дала, диңгеҙ һ.б.). Шул арҡала уларҙың кәсептәре лә төрлө-төрлө

булған һәм эшләп сығарыу мөнәсәбәттәре төрлөсә барлыҡҡа килгән. Һөнәр-кәсептең төрлөсә булыуы һүҙлек составында үҙгәреш тыуҙырған. Быларҙан тыш, иң тәүге сығанаҡтан айырылып китеп яңы территорияға килгән ҡәбиләләр башҡа ят ҡәбиләләр менән осрашып аралашҡандар (башҡа ят диалектта һөйләшеүсе). Шул аралашыу арҡаһында төрлө һүҙҙәр үҙләштергәндәр. Быға миҫал итеп хәҙерге венгр телен күрһәтергә мөмкин. Боронғо венгр ҡәбиләләре, бик күп замандар күсеп йөрөй торғас, Европаның уртаһына, Дунай тигеҙлегенә барып сыҡҡандар һәм шунда ултыраҡланғандар Улар төрлө славян ҡәбиләләре менән интенсив аралашҡандар, шуға күрә лә уларҙың телендә бик күп славян һүҙҙәре осрай, тик улар фонетик яҡтан бик ныҡ үҙгәргән.

Мәҫәлән:

| | |
|---|---|
| славянса | венгрса |
| двор | udvar |
| свобода | szabadsag |
| пол (половина) | fel |

Боронғо сыуаш ҡәбиләләре, Волганың үрге ағышы тирәһенә күсеп килеп ултыраҡлашҡас, боронғо рус ҡәбиләләре менән интенсив аралашҡан, хатта артабан христиан динен ҡабул иткәндәр. Шуға күрә сыуаш телендә боронғо рус һүҙҙәре күберәк осрай.

Бер-береһенән бүленеп киткән ҡәбиләләрҙе Ф Энгельс ҡан-ҡәрҙәш ҡәбиләләр, ә телдәрен ҡәрҙәш телдәр тип атай.

Ҡәрҙәш телдәрҙең һәм ҡәбиләләрҙең бер-береһенән айырылыуына ни тиклем оҙаҡ замандар үтһә, ул телдең аңлашылмау дәрәжәһе шул тиклем күп була. Ә инде ҡәрҙәш телдәрҙең һәм ҡәбиләләрҙең бер-береһенән айырылыуына сағыштырмаса аҙыраҡ замандар үтһә, ул тел еңелерәк аңлашыла. Шуға күрә төрки телдәренең күбеһе беҙгә сағыштырмаса еңел аңлашыла. Тимәк, төрки ҡәбиләләренең айырылып китеүе сағыштырмаса яңы эраның баштарында булған, тип аңларға кәрәк.

Ғалимдарҙың иҫәпләп сығарыуынса, ҡәрҙәш телдәр бер-береһенән аңлашылмаҫлыҡ хәлгә килеп үҙгәреү өсөн, кәм тигәндә өс мең йыл ваҡыт кәрәк. Мәҫәлән, 5-8 быуатҡа ҡараған орхон-енисей яҙмаларының теле (сама менән 1500 йыл) төрки телдәрендә һөйләшеүсе кеше өсөн сағыштырмаса еңел аңлашыла. Ә инде яҡут һәм сыуаш телдәре һөйләшкәндә лә, яҙыуҙы уҡыған саҡта ла төрки халыҡтарының барыһына ла тиерлек бөтөнләй аңлашылмай. Шуға күрә лә боронғо яҡут һәм сыуаш ҡәбиләләренең ниндәйҙер бер боронғо төрки ҡәбиләһенән бүленеп китеп бойондороҡһоҙ йәшәй башлауына 3-4 мең йыл үткән, тип ҡарарға кәрәк.

Бер тел рамкаһында төрлө диалекттар һәм һөйләштәрҙең барлыҡҡа килеүе, йәшәүе лә шул халыҡ эсендә төрлө ҡәбиләләрҙең үҙ алдына йәшәүенән килә. Бер үк халыҡ эсендәге диалекттар территориаль яҡтан ни тиклем алыҫ булһа, уларҙа диалекттар айырмаһы ла күберәк була. Мәҫәлән, татар диалекттары араһында. Себер татарҙарының диалектын алырға мөмкин. Шуға күрә бер тел рамкаһында төрлө диалекттарҙың барлыҡҡа килеүе айырым ҡәбиләләрҙең күсеп китеп йәки шул урында тороп ҡалыуы сағыштырмаса

уларҙың үҙ аллы йәшәүенән килә.

Диалект - ул ҡәбилә теле Төрки телдәрендә диалекттарҙың барлыҡҡа килеүе һәм уларҙың тарихы бик ҡатмарлы. Сөнки төрки халыҡтары IV - V быуаттарҙан башлап XV - XVI быуаттарға тиклем бик хәрәкәтсән тормош кисергәндәр. Төрки ваҡ ҡәбиләләр береһенән күсеп икенсеһенә барып ҡушылғандар,

## ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕН КЛАССИФИКАЦИЯЛАУ МӘСЬӘЛӘҺЕ

Төрки телдәрен классификациялауҙың бик зур тарихы бар Был проблема менән бик күп ғалимдар, тарихсылар, телселәр шөғөлләнгәндәр Мәҫәлән, атаҡлы ғалим-телселәр Березин И. Н. , Ильминский Н. И. , Радлов В. В. , Аристов Н. А. , Корш Ф. Е., Катанов Н. Ф. һәм башҡалар (XIX быуатта йәшәгән ғалимдар) Ахыр сиктә был эш менән Самойлович А. Н. шөғөлләнгән (20-се йылдар). Ул быға тиклемге бөтә классификацияларҙы иҫәпкә алған булған. Ләкин төрки телдәрен классификациялауҙа ғалимдарҙың ошоғаса булған хеҙмәттәрендә бер етешһеҙлек бар төрки телдәрен халыҡтарының тарихынан айырыу, уларҙың үҫеш тарихына бәйләмәйенсә төркөмләү. Шуға күрә уларҙың классификацияһы бер яҡлыраҡ килеп сыҡҡан. Мәҫәлән, ул йә географик билдәне генә нигеҙ итеп алған, йә айырым фонетик, грамматик күренештәрҙе нигеҙ итеп алған. Әйтәйек, проф. Корш Ф.Е. , төрки телдәрен классификациялағанда, уларҙы көньяҡ һәм төньяҡ телдәргә бүлә. Уның әйтеүенсә, көнъяҡтағы хәҙерге заман хәбәр ҡылымы *-р* (алыр, китер) аффиксы менән, ә төньяҡта *-а* (ала, килә) күрһәткесе менән яһала. Ләкин XIX быуатта үткәрелгән классификацияларҙың береһендә лә конкрет айырым бер телдең төрки телдәре системаһында тотҡан урыны, үҫеше, тарихы, бәйләнеше, күрше йәки алыҫ телдәргә мөнәсәбәте күрһәтелмәй. Мәҫәлән, ниндәй генә төрки телен алып ҡарамайыҡ, уның территориаль яҡтан күрше һәм алыҫ булған, йәки боронғо телгә мөнәсәбәте бар. Әйтәйек, V - VIII быуаттарҙағы орхон-йәнәсәй яҙмалары теленә (йәғни боронғо төрки теленә) шул уҡ Себер татарҙарының, башҡорт, һары уйғырҙар телдәренең һәм шул уҡ башҡорт теленең яҡут теленә мөнәсәбәте бар. Был мөнәсәбәттәр телдең бөтә өлкәһендә лә (лексика, фонетика, морфология) сағыла Яҡут теленең сыуаш теленә бәйләнеше бар. Мәҫәлән, башҡа төрки телдәрҙә беренсе ижектәге *а* өнө урынына сыуаш телендә *у* өнө килә:

| | |
|---|---|
| башҡортса: *бар,* ҡара | сыуашса: *пур,* хура |
| татарса: ат башындай | үзбәксә: от боши-дай (урын ваҡыт килештә от боши-да) |
| яҡутса: тах (сыҡ) | сыуашса: тух (сыҡ) |

Был осраҡта татар телендә *-н-* килтереп ҡуялар: *ат башын-да.*
Яҡутса кыһыл, башҡорт һөйләштәрендә ҡыһыл, кыыс ҡыһ, йәғни ҡыҙ.
Хакас телендә дөйөм төрки *ч* өнө билдәле позицияла *с* өнөнә күсә: *ч* > *с.*

Төрки телендә - ач, хакасса - ас, башҡортса - ас.

Был миҫалдарҙан төрлө төрки телдәрендә бер үк билдәләрҙең булыуын күрәбеҙ

Һуңғы ваҡыттарҙа төрки телдәренеңентекле классификацияһы проф. Баскаков Н.А. тарафынан эшләнде. Ул үҙенең "Введение в изучение тюркских языков" (М., 1960; изд. 2-е. М., 1969) китабындағы классификацияһында төрки телдәренең бөтә яҡтарын (лексика, фонетика, морфология) иҫәпкә алырға тырышҡан. Ләкин иң мөһиме шунда: төрки телдәренең үҫеше һәм тарихы иҫәпкә алына. Шулай уҡ теге йәки был телдең дөйөм төрки телендә тотҡан урыны һәм башҡа үҙенсәнлектәре иҫәпкә алына. Шуға күрә ул үҙенең классификацияһын "Төрки телдәренең генеалогик классификацияһы" тип атай. Генеалогия - килеп сығыш тигән һүҙ.

Проф. Н.А. Баскаков төрки телдәрен төп ике тармаҡҡа бүлә: а) көнбайыш һундар һәм б) көнсығыш һундар тармағы.

Беҙҙең эраға тиклем һәм беҙҙең эраның баштарында йәшәүсе һунн ҡәбиләләре көнбайышҡа бер нисә тапҡыр яу менән килгәндәр. Бындай яуҙарҙың иң ҙуры беҙҙең эраға тиклемге I быуатта булған. Ул һундар һәм ҡатайҙар ябырылыуы тип атала. Аҙаҡҡы ябырылыу беҙҙең эраның IV - V быуаттарында булған. Бына ошо V быуатҡа тиклемге осорҙо проф. Н.А. Баскаков һундар эпохаһы, ә беҙҙең эраға тиклем булған дәүерҙе алтай эпохаһы тип атай.

Хәҙерге төрки телдәрен проф. Н.А. Баскаков түбәндәгесә классификациялай:

1. Болғар группаһы:
   а) сыуаш теле;
2. Ҡыпсаҡ-болғар группаһы:
   а) татар теле;
   б) башҡорт теле;
3. Ҡыпсаҡ-половец группаһы:
   а) караим;
   б) ҡумыҡ;
   в) ҡарасай-балҡар;
   г) ҡыр-татар;
4. Ҡыпсаҡ-ноғай төркөмө:
   а) ноғай;
   б) ҡарағалпаҡ;
   в) ҡаҙаҡ телдәре;
   г) үзбәк теленең ҡышлаҡ (ауыл) диалекттары.

Быға тиклем йәшәп килгән классификация буйынса 2, 3, 4-се төркөмдәр ҡыпсаҡ-төрки телдәре тип кенә йөрөтөлә ине. Ҡыпсаҡ-төрки теленә йәнәшә ҡырғыҙ телен дә индерәләр ине.

5. Оғуз-болғар группаһы:
   а) гагауз (Румыния);
   б) Балҡан төрөктәренең теле (Болгария, Югославия);
6. Оғуз-сельджук төркөмө:
   а) әзербайжан;

б) төрөк;

в) көньяҡ ҡырым татарҙарының теле;

7. Оғуз-төркмән группаһы:

а) төркмән теле;

б) трухмән теле;

Быға тиклемге классификацияла 5, 6, 7-се төркөм телдәре оғуз-төрки телдәре тип йөрөтөлә ине. Хәҙер ҙә был термин ҡулланыла.

8. Ҡарлуҡ-хорезм группаһы:

а) үзбәк теле;

б) уйғыр теле.

Был телдәр, проф. Н.А. Баскаковтың классификацияһы буйынса, көнбайыш һун тармағына инә Ә көнсығыш һун тармағына ул тува, яҡут, хакас телдәрен, шор, һары уйғырҙар һәм башҡа ваҡ телдәрҙе индергән. Был тармаҡҡа йәнә тау-алтай, ҡырғыҙ телдәре инә. Ҡырғыҙ телен Н.А. Баскаков ҡырғыҙ-ҡыпсаҡ теле тип атаған. Иҫке классификацияла әле һаналған телдәр көнсығыш төрки телдәре тип әйтелә. Шулар араһында яҡут телен генә айырым күрһәткәндәр.

## АЙЫРЫМ ТӨРКӨМ ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕНӘ ФОНЕТИК ХАРАКТЕРИСТИКА

Телдәргә фонетик характеристика биргәндә, телдең динамикаһын иҫтә тоторға кәрәк. Тел динамикала булғанға күрә лә ундағы күп өндәр (һуҙынҡы, тартынҡы) даими булмаҫҡа мөмкин. Сөнки өндәр һүҙҙәрҙе ҡулланғанда теге йәки был эргәләш өндөң йоғонтоһо менән үҙгәрергә мөмкин һәм үҙгәрә. Был, бигерәк тә, тартынҡы өндәрҙә асыҡ сағыла. Төрки телдәренең динамикаһында, бигерәк тә һүҙҙең төрлө урынында һаңғырау тартынҡылар даими түгел. Мәҫәлән, *ч, ш, с, п, щ к, к, х*. Был тартынҡылар һүҙҙең төрлө урынында төрлө төрки телдәреңдә төрлөсә үҙгәрә, һәм бөтә төрки телдәре өсөн билдәле бер ҡалып юҡ. Әйтәйек, ч тартынҡыһы татар телеңдә даими. Ләкин сыуаш телендә *ш, ч, с* өндәре һуҙынҡылар араһында яңғыраулана.

Сыуашса: *Ачасем вармана кайни* (*ажазем вармана гайни*) Балалар урманға киттеләр.

Шуны иҫәпкә алырға кәрәк: хәҙерге төрки телдәрендә был типтағы позицион үҙгәрештәр орфографияла сағылдырылмай. Шуға күрә телдең төрлө позицион үҙгәрешен белер өсөн, ниндәйҙер дәрәжәлә ул телдең динамикаһын белергә кәрәк (йәғни йәнле яңғырауын). Мәҫәлән, *ч* өнөнөң һуҙынҡылар араһында яңғыраулanыуы әзербайжан теленә хас:

*алачак – алажаҡ*

*киләчәк – гиләжәк*

Бындай күренеш төркмән теленең динамикаһына ла хас.

Әйтәйек, *с* өнөнөң һуҙынҡылар араһында *з* өнөнә үҙгәреүе сыуаш теленән башҡа хакас теленә лә хас.

хаҡасса: ата-зы, татарса: ата-сы,

пас – пазым

ат – азым һ. б.

Бындай үҙгәрештәр орфографияла сағылдырыла Мәҫәлән, туваса *эш-*

*эжең* (иптәш).

Был типтағы фонетик үҙгәрештәр төрлө телдә төрлөсә. Уларҙың ҡайһы берҙәре йәнле. Ҡайһы берҙәрендә бөтөнләй нығып ҡалған. Мәҫәлән, ҡыпсаҡ-төрки телдәренең күбеһеңдә (башҡорт, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, себер татарҙары телдәрендә) *ике гөн* тип һөйләйҙәр.

Себер татарҙары телендә: *киҫә гилде,*

ҡаҙаҡса: *кіше гелди*

Оғуз телдәрендә был процесс туҡтаған, йәғни *ғ, г* булып ҡатып ҡалған. Мәҫәлән,

әзербайжанса: *ғара*, башҡортса *ҡара,*

төркмәнсә: *ғарын – ҡарын, ғаш – ҡаш, ған - ҡап.*

Һүҙ башында *ҡ, к* өндәре татар, үзбәк, уйғыр телдәрендә даими. Ҡыпсаҡ-төрки телдәрендә йә *ҡ*, йә *ғ* килә, ә оғуз-төрки телдәреңдә бөтөнләй *ғ* килә. Телдең динамикаһында *ҡ к, ғ, г* өндәре һәр ваҡыт сиратлашып йөрөгәнгә күрә, оғуз-төрки телдәреңдә *з, г* өндәре һүҙ башында бөтөнләй нығынып ҡалғандар. Ҡыпсаҡ-төрки телдәрендә лә *х, к, ғ, г* өндәре сиратлаша: *аяғ ауырта, урағ өҫтө*. Ләкин был орфографияла сағылдырылмай

Оғуз-төрки телдәрендә системалы рәүештә һүҙ башында *д* өнө килә: *даг* (тау), *деш* (теш), *даныш* (таныш), *дел* (тел), *дөз* (төҙ), ә башҡа төрки телдәрендә һүҙ башында *т* килә. Был хәл бер һүҙҙең һуҙынҡылары араһында, йәки ике һүҙ араһында, шулай уҡ сонор тартынҡыларына эргәләш *т* өнөнөң *д* өнөнә яңғыраулаңыуынан килеп сыҡҡан. Был хәл - төрки телдәрендәге ғәҙәттәге фонетик күренеш. Ул, бигерәк тә, сыуаш телендә сағыла:

*Мат* (духан) - *ҡайҙа сығаһың*

Бындай күренеш башҡорт һөйләштәреңдә лә бар. Мәҫәлән, *тугай-дугай* (был сыуаш теленең күренеше, болғар элементы).

Яҡут теленә лә шул уҡ позицион үҙгәрештәр бик характерлы. Мәҫәлән, *с* өнө һүҙ башында, уртаһында, аҙағында, шулай уҡ ике һуҙынҡы уртаһында ла *h* өнөнә әйләнә.

Яҡутса:

ис (эс) – иһәмен (исемен), иһиң (эсегеҙ),

ас (аш) - аһар (ашай),

сүс (йөҙ) - икки һүүс (ике йөҙ),

ағыс (8) - ағыһ ат (һигеҙ ат) биэс (5) - биэһ ат (биш ат)

Тап шундай үҙгәреш боронғо башҡорт телендә лә булған, ә хәҙер *h* өнө *ҫ* өнө аша нығынып ҡалған боронғо төрки: *сут > ҫөт > һөт – с > ҫ > h.*

Төркмән телендә лә шул уҡ хәл, һүҙ башында һәр ваҡыт *ҫ* өнө килә.

## ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕНДӘ АЙЫРЫМ ТӨРКӨМДӘРҘЕҢ ДӨЙӨМ ФОНЕТИК-МОРФОЛОГИК ХАРАКТЕРИСТИКАҺЫ

1. Оғуз-төрки телдәре төркөмө (төркмән, төрөк,ғағауз, әзербайжан телдәре)

### 1) Фонетик характеристика

Төп төрки һүҙҙәренең, башында *г, г* өндәре килә: *гара, гаш, гилмәк, гитмәк* һ.б. Был хәл боронғо төрки телдәренең динамикаһында һүҙ башында *ҡ, к* өндәренең төрлө фонетик шарттарҙа *г, г* менән сиратлашып тороп ҡалған: *ҡан* > *ҡараған*.

Оғуз-төрки телдәренең бөтәһендә лә, шулай уҡ тува телендә һүҙ башында һәр ваҡыт *т* өнө урынына *д* өнө килә: *даг* (тау), *дел* (тел), *деш* (теш), *даныш* (таныш) һ. б.

Бигерәк тә әзербайжан, төрөк телдәрендә ирен гармонияһы эҙмә-эҙ үткәрелә. Мәçәлән, һүҙҙең уртаһында *о, у, ө. у* өндәре булһа, аффикстарҙа ла иренләшкән өндәр була. Мәçәлән, *гөз* - *гөзүм*, *долу* (тулы), *дурмуш* (тормош) - *дурмушү*, *онуң* (унын). Ләкин төркмән телендә был хәл башҡасараҡ. Унда ирен гармонияһы эҙмә-эҙ һаҡланмаған. Сөнки ул көнсығыш оғуз телдәренә ҡарай. Төркмән теле үҙенең тарихи үçешендә башҡа төрки теле менән яҡынлашҡан. Мәçәлән, үзбәк телендә ирен гармонияһы юҡ. Оғуз-төрки телдәрендә һүҙҙең беренсе ижегендә боронғо төрки һуҙынҡылары үҙгәрешһеҙ һаҡланған. Ул һуҙынҡылар: *о, у, б, а (ә), и* боронғо төрки телдәрендәгесә үҙгәрешһеҙ ҡалған,

| боронғо төрки: | әзербайжанса: |
|---|---|
| отыз | отуз |
| көз | көз |
| соз | сөз (çоҙ) |
| сәкиз | сәггиз |
| тоҡыз (тоҡуз) | доғғуз |
| биз | биз |
| сиз | сиз |
| бир | бир |
| ит (эт) | ит (эт) |
| эт (ит) | эт (ит) |

Бөтә оғуз телдәре өсөн дә *г, г* өндәренең һуҙынҡылар араһында *й* өнөнә күсеү хас: *түгел* - *дәйел сыуыҡ* - *суйук* (һыуыҡ), *сыу* - *суг* - *суйу*. Йәнә *к* өнөнөң *й* өнөнә күсеү күренеше бар: әзерб. инәк (һыйыр) - инәге (һыйыры) - инәйи. Йәнә сағыштырығыҙ:

| башҡортса: | огуз телдәрендә: |
|---|---|
| атаға | атайа |
| анаға | анайа |
| ҡараған | ғарайан |
| башлаған | башлайан |
| эшләгән | ишләйән |

*-Ған* ялғаулы ҡылымдар башҡорт телендә үткән заман сифат ҡылым мәғәнәһендә килһә, әзербайжан телендә хәҙерге заман сифат ҡылым функцияһын үтәй.

Төрөк телендә һуҙынҡыларға бөткән һүҙҙәрҙең билдәле төшөм килеш формаһында ла *г* өнө *й* өнөнә күсә: *ана-гы* > *ана-йы* (йәғни *ана-ны*).

Төркмән телендә башҡорт телендәге һәм уның диалекттарындағы һымаҡ специфик *ҙ, ç* өндәре бар. Ләкин улар яҙыуҙа сағылдырылмай (унда *з, с* яҙыла): *сизин* яҙыла, ә *çиҙин*, тип уҡыла. Был хәл бөтә позицияла, аффикстарҙа ла, тамыр һүҙҙәрҙә лә күҙәтелә: *гилярис* (гиляриç) - *киләбеҙ*. Төркмән йәнле телендә *ç* өнөнөң *h* өнөнә күсеү күренеше бар: *ғараса* (ҡараһа), ә йәнле телдә: *ғараһа*.

Төркмәндәрҙе, ғәҙәтте, сельджуктар, йәки сальджуктар тип атайҙар. Улар боронғо замандарҙа Себерҙә йәшәгәндәр. Шуға уларҙа Себер башҡорттарының йоғонтоһо бар. Ҡайһы бер ваҡ башҡорт ырыуҙары ла төркмәндәр составына ҡушылып киткәндәр.

2) Морфологик үҙенсәлектәре.

Ҡылымдар *-мыш (-меш)* аффиксы менән яһала: *алмыш, гелмеш*. Хәҙерге заман сифат ҡылым тартынҡыға бөтһә: *алам, гәләм, эшләйән, башлайан*. Хәҙерге заман ҡылым *-ыр (-ир)* аффикслы: *алыр, гэлир*. Һуҙынҡыларға бөтһә: *башлайыр, эшләйир*. Киләсәк заман хәбәр һөйкәлеше лә шул уҡ, ләкин затланышы бүтәнсә. Мәçәлән, әзербайжан телендә хәҙерге заман – *алыр-ым*, киләсәк заман – *алыр-ам, гәлир-әм*. Ваҡытҡа мөнәсәбәтле үткән заманда *иде* ярҙамсы ҡылымы төп ҡылым менән бергә ҡушыла. Мәçәлән, татарса: *алған иде, килгән иде*; әзербайжанса: *алмышды, гәлмишде*.

Әзербайжан телендә I зат күплек хәҙерге заман һәм үткән заман *-ыг (-ик)* аффикслы. Мәçәлән: *алыр-ыг, гәлир-ик*; төрөксә: *алыр-ыз, гәлир-из*, төркмәнсә: *алыр-ыс, геляр-ис*. Хәбәрлек формаһында ла шул уҡ аффикстар. Мәçәлән, әзербайжанса: *биз данышыг* (беҙ танышбыҙ).

Оғуз телдәрендә күплек аффиксы тик *-лар (-ләр)*: *даглар, адамлар* һ.б. Килеш системаһында эйәлек һәм төшөм килеш үҙенсәлекле. Тартынҡыға бөткән һүҙҙәрҙең эйәлек килеш аффиксы *-ын (-ин)*, төркмән телендә *-ын (-ин)*. Миçалдар: әзербайжанса - *китабын сәһипәси*, төркмәнсә - *китабың сахыпасы* (китаптың бите). Ошо типтағы икенсе зат тап килә: төркмәнсә – *китабың сахыпасы* һәм *сениң китабың*.

Ошо хәл әзербайжан телендә эйәлек килеш бармы, әллә юҡмы тигән бәхәс тыуҙырған, сөнки үрҙәге ике форма (китабың сахипасы, сениң ситабың) тап килә.

3) Билдәле төшөм килеш

Оғуз телдәрендә тартынҡыға бөткән һүҙҙәрҙең төшөм килеш аффиксы -ы (-и). Мәçәлән: *китаб-ы алдым* (китапты алдым), *тәбиб-и гөрдим* (врачты күрҙем). Был билдәле төшөм килеш формаһы өсөнсө зат тартынҡы формаһы менән тап килә: *онун китаб-ы*. Был контекста ғына беленә.

Килеп сығышы (генетик) яғынан *-ы (-и)* рәүешле билдәле төшөм килеш аффиксы менән тартынҡы нигеҙ өсөн булған өсөнсө зат эйәлек аффиксы *-ы (-и)* икеһе бер сығанаҡтан булған. Был турала тюрколог Богородицкий В. А. бынан 50-60 йылдарҙан элек әйткән. (Богородицкий В. А. "Введение в татарское языкознание"). Ләкин башҡа тюркологтар уның был дөрөç фекеренә иғтибар итмәгәндәр. Ә асылда ике хәлдә лә *-ы (-и)* элементы - билдәлелек мәғәнәһе

береүсе күрһәткес. Шуға күрә *китаб-ы, уның китаб-ы* тибындағы форманы тура тултырыусы булғанда билдәле төшөм килешкә ҡуйыу мөмкин түгел.

### 4) Һуҙынҡы өнгә бөткән исемдәрҙең төшөм килеш формаһы

Төрөк телендә һуҙынҡы өнгә бөткән исемдәрҙең төшөм килеш формаһы -*йы: ана-йы*. Ул боронғо *ана-ғы* тибындағы форманан яһалған. Тимәк, оғуз телдәренең береһендә -*гы (-ги)* рәүешле төшөм килеш аффиксы булған.

Беҙҙең телдәрҙә (ҡыпсаҡ) урынды асыҡлаусы сифат тап шул аффикс менән яһалған. Мәҫәлән: *ауылда-ғы, урманда-ғы, өйҙә-ге* һ.б. Был типтағы сифат оғуз телдәрендә -*кы (-ки)* аффиксы менән яһала: *шәһәрдә-ки, дағда-кы* . Был форма беҙҙә эйәлекте белдерә: *ағайымды-ҡы, еңгәмде-ке*.

Эйәлек һәм хәбәрлек формалары оғуз төрки телдәрендә бик үҙенсәлекле. Был йәһәттән төркмән теле айырылып тора. Мәҫәлән: унда хәбәрлек формаһында -*дыр (-дир)* аффиксы ҡушыла: *адам-дыр-ын* (кешемен), *адам-дыр-ыс* (кешебеҙ), *ишчи-дир-ис* (эшсебеҙ). Төрөк телендә I зат эйәлек һәм хәбәрлек формалары тап килә: *адамым* (мой человек), *адамым* (я человек), *адамыс* (мы люди). Әзербайжан телендә лә шундай уҡ күренеш күҙәтелә.

Төрки тел белемендә хәбәрлек һәм эйәлек аффикстары сығышы менән зат алмашлығынан яһалған, тип баралар. Йәғни: *кеше-беҙ, кеше-мин* һ.б. Былай уйлау өсөн нигеҙ бар. Сөнки күпселек төрки телдәрендә хәл тап ана шулай. Ләкин әзербайжан телендәге -*ыг (-иг)* аффикстарын (мәҫәлән, *адам-ыг, тәбиб-иг*) бер ниндәй зат алмашлығы менән бәйләү мөмкин түгел. Башҡорт теленде лә шундай хәлгә юлығабыҙ. Мәҫәлән: *укытыусы-һыгыҙ*. Бындай зат алмашы юҡ.

## 2. Ҡыпсаҡ төрки телдәренең дөйөм фонетик-морфологик характеристикаһы

Был – төрки телдәренең иң ҙур төркөмө. Уға башҡорт, татар, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ, ойрот, нуғай, ҡумыҡ, караим, ҡарасай-балҡар телдәре һәм үзбәк теленең ҡышлаҡ диалекты инә. Был телдәр бик ҙур территорияны алып тора. Ҙур территорияға таралғанлыҡтан, ҡыпсаҡ төрки телдәренең һәр береһендә айырмалыҡтар бик күп, йәғни уларҙың фонетик-морфологик үҙенсәлектәрен бер генә ҡалыпҡа һыйҙырыу мөмкин түгел. Мәҫәлән, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғай телдәре өсөһө бергә бер бәләкәй төркөмдө тәшкил итә. Уларҙың үҙҙәренә хас морфологик үҙенсәлеге бар. Көнсығыш ҡарасәй-балҡар, ҡумыҡ телдәре үҙҙәре бер урынды биләй. Ҡараим теле үҙенә бер башҡа урынды алып тора. Башҡорт теле менән Себер татарҙарының теле, морфологик һәм лексик яҡтан күберәк дөйөмлөк тәшкил итеп, үҙҙәре бер бәләкәй төркөмгә инә. Татар теле үҙенең бик күп морфологик үҙенсәлектәре менән уйғыр һәм үзбәк телдәренә яҡын тора.

Марксистик тел белеменең әйтеүенсә, һәр бер халыҡ үҙ алдына йәшәү арҡаһында, һәр халыҡтың үҙенә башҡа теле барлыҡҡа килә башлай. Артабан ҡыпсаҡ төрки телендә үҙ-ара аралашыу мөмкин булмаған. Ҡыпсаҡ төрки теле башҡа телдәр менән дә яҡынға килгән.

Татар телендә яҙыуҙың барлыҡҡа килеүе, урта быуаттарҙағы

сығанаҡтарға ҡарағанда, боронғо уйғыр теленә барып тоташа. Башҡорт теле Себер һәм ҡаҙаҡ, ә ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ һәм нуғай телдәре үҙ сиратында ҡарлуҡ төрки телдәре (үзбәк, уйғыр) менән яҡын килгән.

Ҡарағалпаҡ, ҡаҙаҡ, үзбәк, уйғыр телдәрендә 1 зат формаһы бер төрлө: *алайын, -барайын*. Хәбәрлек, эйәлек һәм ҡылымдың затланыш формаларында I зат күплек һәр ваҡыт *-мыз (-мез),* II зат күплек һәр ваҡыт *-ңыз (-ңез)* рәүешендә ҡулланыла. Ә инде төньяҡ ҡыпсаҡ телдәрендә был формалар *-быз (-без).*

*-ғыз (-гез)* булып нығынып ҡалған, йәғни *б* менән *м, ң* менән *г* өндәре сиратлашҡан. Ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ телдәрендә боронғо төрки һуҙынҡылары үҙгәрешһеҙ һаҡланған, һәр хәлдә нык үҙгәрешкә бирелмәгән, бигерәк тә *о, у, ө, ү* өндәре. Мәҫәлән, ҡырғыҙ телендә: *отуз, тоғуз* һ.б. Боронғо төрки *тағ* һүҙе ҡырғыҙса *тоо,* урын-ваҡыт килеше *тоо-до* рәүешендә ҡулланыла. Был телдәрҙә беренсе ижектәрҙәге *о* өнө урыҫ телендәге һымаҡ киң әйтелә. Ҡырғыҙ телендә ялғауҙарҙа ла *о* өнө күҙәтелә: *закон-дор. Көз* (йәғни күҙ), *сөз* (йәғни һүҙ) һүҙҙәрен ҡулланыу буйынса ла ҡырғыҙ теле боронғо төрки теленә яҡын. Ә бына ҡаҙаҡ телендәге *и* өнө редукцияға бирелгән. Мәҫәлән: ҡырғыҙса - *биз,* ә ҡаҙаҡса - *біз, і* өнө беҙҙеңсә *е* өнө араһындағы өн. *Е* өнө менән дә шул уҡ хәл күҙәтелә: *есіт* (*јесіт*). Һүҙ тамырында боронғо төрки һуҙынҡы өнө ҡырғыҙ телендә нығыраҡ һаҡланған.

Ҡырғыҙ телендә *ң* өнө юҡ, уның урынына *н* өнө килә. Ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ телдәрендә боронғо *ч* өнө *ш* өнөнә күскән: *оҡучы - оҡушы.* Боронғо төрки *ш* өнө *с* өнөнә күскән: *бас, тес.* Быны үҙ сәбәптәре бар: телдәрҙә, ғөмүмән, бер төрки телдәрендә генә түгел, тарихи үҫеш процессында өндәрҙең ҡыҫырыҡлап сығарылыуы күҙәтелә. Әйтәйек, теге йәки был өндөң үҙгәреше арҡаһында яңы бер өн барлыҡҡа килһә, мәҫәлән: *ч > ш,* һәм шул яңы өн шул телдә йәшәгән иҫке өн менән тап килһә, яңы өндөң тәьҫире арҡаһында иҫкеһе үҙгәрергә мәжбүр булған. Был өндәрҙең ҡыҫырыҡлап сығарыу законы тип атала. Ул беҙҙең быуаттың баштарында Австрия телсеһе Карл Люик тарафынан эшләнгән. Был закондың хәрәкәт итеүе башҡа телдәрҙә лә бар. Мәҫәлән, быны төрки һәм алтай телдәренең тарихи фонетикаһы өсөн дә ҡулланырға мөмкин. Боронғо төрки телдәренең башҡорт һәм ҡаҙаҡ телдәрендәге үҙгәрешен түбәндәге миҫалдарҙан асыҡ күреп була: 1) *ч > с, с* (> *ç*) > *h* - башҡорт телендә; 2) *ч > ш, ш > с* - ҡаҙаҡ телендә. Хәҙер инде монгол телендәге өндәрҙең бүрәт теленә күсешенә иғтибар итегеҙ: *ц > с, с > h*. Монгол телендәге *цэцэн, саадак* һүҙҙәре *сәсән, һаадак* рәүешендә ҡулланылып йөрөй.

Татар һәм башҡорт телдәрендә боронғо төрки һүҙенең һуҙынҡылар клавиатураһындағы булған үҙгәреште фәҡәт ошо закон нигеҙендә генә төшөндөрөп була. Был бигерәк тә боронғо төрки *ö - ү, о - ү, ä - и* кеүек беренсе ижектең һуҙынҡыларына ҡарай. Ул һуҙынҡылар оҙон әйтелгән. Уның оҙонлоғо төркмән, яҡут, хатта ҡаҙаҡ телендә һаҡланған. Ләкин башҡорт һәм татар телдәрендә беренсе ижектәрҙең оҙонлоғо юғалған һәм тар һуҙынҡыларға үҙгәргән. Мәҫәлән: *о > у, ö > ү, ä > и*. Хәҙер тар *у, ү, и* өндәре беҙҙәге тарыраҡ өндәргә күсә: *у > о, ү > ө* (*ö*), *и > е* (э).

Өндәрҙең ҡыҫырыҡлап сығарылыуы һүҙҙең мәғәнәһе һәм формаһы менән бәйләнгән. Ысынлап та, әгәр башҡорт, татар телдәрендә беренсе этаптағы үҙгәреш кенә булып, икенсеһе булмаһа, бик күп һүҙҙәрҙең һәм формаларҙың

мәғәнәһен айырып булмаҫ ине. Мәҫәлән:

| боронғо төрки теләндә: | башҡорт телендә: |
|---|---|
| *ӓ* т (эт) | ит |
| ит | эт |

Был закон яҡут телендә лә осрай, ләкин унда башҡасараҡ мөнәсәбәттә, тик бер үк принципта. Боронғо төрки j өнө яҡут телендә с өнөнә күскән: *jуз* > *суз, jол* > *суол*. Ләкин яҡут телендә боронғо төрки *с* өнө *h* булған. Мәҫәлән: *сүт* > *hүүт* > *үүт*. Артабан яҡут телендәге *h* өнө төшөп ҡалған. Был хәлде ике төрлө төшөндөрөргә мөмкин. Беренсенән, *h* өнө артикуляция яғынан көсһеҙ өн. Шуға Европа телдәрендә боронғо латин телендәге *h* өнө әйтелмәй, ләкин яҙыуҙа һаҡлана. Икенсенән, яңы барлыҡҡа килгән *с* өнө һүҙ башында ике һүҙҙең һуҙынҡыһы араһында *h* өнө менән сиратлаша:

| боронғо төрки телендә: | яҡут телендә: |
|---|---|
| ики сүз | икки һүс |
| матур jаз | үтүө һаас |

## ТӨНЬЯҠ КАВКАЗ ТӨРКИ (ҠУМЫҠ, ҠАРАСАЙ-БАЛҠАР) ТЕЛДӘРЕ

Ҡумыҡ телендә һүҙ башында *к, г* өндәре сиратлашып йөрөй. Мәҫәлән: *ҡара ган* (*ҡара ҡан*). Был күренеш башҡорт, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, нуғай телдәре өсөн характерлы. Ләкин ҡумыҡ телендә һүҙ башында *г* өнө нығынған: *гэлмэк, гөрмэк*. Боронғо төрки телендәге һуҙынҡы өндәр ныҡ үҙгәрешкә бирелмәгән, бигерәк тә *о, у, ү, ө, а, э* өндәре.

Морфологик яҡтан ҡарағанда, Төньяҡ Кавказ төрки телдәрендә билдәле төшөм килеш һәм эйәлек килеш өсөн бер генә килеш бар. Уның аффиксы -*ны* (-*ни*). Мәҫәлән: *бала-ны китабы* (эйәлек килеш), *баланы кёрдим* (төшөм килеш). Был күренеш осраҡлы хәл түгел. Эйәлек килеш менән төшөм килештең тап килеүе башҡа төрки телдәрендә (мәҫәлән, үзбәк диалекттарында) системалы рәүештә күҙәтелә. Дөйөм планда алғанда, был күренеш, ғөмүмән, урал-алтай телдәренә характерлы. Уны уғыр-фин телдәрендә лә йыш осратырға була. Мәҫәлән, был тәңгәлдә фин, эстон, мордва телдәрен әйтеп китергә мөмкин. Быны тарихи сәбәптәре бар. Сөнки төрки телдәрендә билдәле эйәлек килеш, билдәле төшөм килеш тарихи яҡтан бер сығанаҡҡа барып тоташа. Эйәлек килеш, төрки телдәрендә -*н* (-*ң*) аффикслы булып, асылда билдәле төшөм килештән үҫкән. Сөнки был килештәрҙең икеһе лә билдәлелек идеяһы менән бәйләнгән. Айырма тик шунда: билдәле төшөм килеш күсемле ҡылым тирәһендә тура тултырыусының, эйәлек килеш аныҡлаусының билдәле булыуын белдерә. Мәҫәлән: *арба юлы* - *арбаның юлы*. Ләкин шуныһы характерлы: әгәр тура тултырыусы менән күсемле ҡылымдар янына башҡа һүҙ килтереп ҡуйһаң, мәҫәлән, *ул шиғырҙы матур һөйләй* тигән һөйләмдә тура тултырыусыны билдәһеҙ төшөм килешкә ҡуйып булмай Эйәлек килеш менән дә тап шундай хәл: *ҡала баҡсаһы* - *ҡаланың матур баҡсаһы*. Был хәл үҙе үк

билдәле төшөм килеш менән эйәлек килештең ҡулланыу шарттары бер булыуын күрһәтә. Әлбиттә, хәҙерге төрки телдәрендә *ҡала баҡсаһы, китап бите* конструкцияларында *ҡала, китап* формалары эйәлек килеш тип ҡаралмай. Был асылда билдәһеҙ эйәлек килеш.

Хәҙерге ваҡытта тюркология фәне менән шөғөлләнеүселәр билдәһеҙ төшөм килеште таный башланылар. Эйәлек килеш менән билдәле төшөм килештең бер сығанаҡтан булыуы хаҡында төрки телендә хәҙер бәхәс бара. Мәҫәлән, күренекле профессор Э.В.Севортян эйәлек килеш менән билдәле төшөм килеш тарихи яҡтан бер тип бара. Проф Б.А.Серебренников был ике килештең үҙ-ара бер ниндәй ҙә бәйләнеше юҡ, тип ҡарай. Быңдай бәхәс шунан килә:

- төрки телдәрен башҡа алтай һәм урал-алтай телдәре менән бергә бөтөн бер система итеп ҡарарға була;

- төрки телдәренең грамматик формаларын һинд-европа телдәре позицияһынан сығып тикшереүҙән, йәки бөтөнләй башҡа типология телдәр позицияһынан сығып өйрәнеүҙән.

Төньяҡ Кавказ төрки телдәрен көнбайыш ҡыпсаҡ телдәре төркөмөнә индерергә мөмкин. Сөнки улар башҡа ҡыпсаҡ телдәренә ҡарағанда башҡорт һәм татар телдәренә яҡын тора. Бының тарихи сәбәптәре бар. Ҡумыҡтар хазар-болғар ханлығы составына ингән булғандар, йыш аралашҡандар, сөнки быға дөйөм иҡтисадтың булыуы мәжбүр иткән.

## ҠАРАИМ ТЕЛЕ

Был телдә аралашыусылар бик аҙ һанда Польша, Литва территорияһында тупланғандар. Ләкин ҡараим теле тюркология фәнендә ныҡ өйрәнелә. Фонетик яҡтан был телдең үҙенсәлеге шунда: ғ, г өндәре кылым, эйәлек һәм хәбәрлек формаларында *й* өнөнә күсә: *г, г > й* [*j*]. Мәҫәлән, ҡырғыҙ-ҡаҙаҡ телдәрендәге *маға, саға* формалары ҡараим телендә *майа, сайа* рәүешендә нығынып ҡалған. Шулай уҡ сағыштырығыҙ: *атығыҙ > атыйыз, алығыҙ > алыйыз*.

Морфологик яҡтан ҡарағанда II зат эйәлек формаһы күплектә лә, берлектә лә бер нигеҙҙән яһала. Мәҫәлән, татарса: *атығыз - атың*, ҡаҙаҡса: *атыңыз - атың*, ҡараимса: *атыйыз - аты*(*й*). Бында *й* өнө күрһәтеүҙе, йәғни билдәлелекте, белдерә. Ҡараим телендәге ошо формалар башҡа төрки телдәрендәге грамматик күренештәрҙе еңел асырға мөмкинселек бирә. Караим телендәге быңдай формалар Литва территорияһында күҙәтелә.

## ҠАРЛУҠ ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕ
(үзбәк һәм уйғыр телдәре диалекттары менән)

Уйғыр, үзбәк телдәре, бигерәк тә морфологик күренештәре яғынан, бер-береһенә яҡын телдәр. Фонетик яҡтан был телдәр бер-береһенән бер ни тиклем айырыла. Мәҫәлән, үзбәк әҙәби телендә сингармонизм законы юҡ. Үзбәк телендә төрлө аффикстарҙың фонетик варианттары юҡ. Күплек күрһәткесе фәҡәт *-лар* ғына рәүешендә ҡалыплашҡан. Сағыштырығыҙ: *шахар-лар, киши-лар, бола-лар*. Ләкин шунnetworks һы характерлы: был һүҙҙәрҙең ялғауҙарындағы *а* өнө

*а* менән *ә* уртаһындағы өн. Үзбәк телендә башҡа һуҙынҡы өндәр менән дә шундай хәл. Һуҙынҡы өндәр үҙ иштәре менән тиңләшкәндәр. Сағыштырығыҙ:

| боронғо төрки телендә: | үзбәк телендә: |
|---|---|
| а – а | $а^{ә}$ |
| ы – и | $ы^{и}$ |
| у – у (й) | у |

Шул рәүешле телдең үҫеш процесында һуҙынҡы өндәрҙең тигеҙләнеүе конвергенция тип атала. Үзбәк теленең һуҙынҡылар системаһы өсөн конвергенция тигән күренеш характерлы. Мәҫәлән, *боланинг* һүҙендәге *и* өнө беҙҙең телдәге *и* өнөнә лә, *ы* өнөнә лә тура килмәй, ул *и* менән *ы* араһындағы өн, йәғни "ы"-лашҡан *и* өнө.

Уйғыр телендә быңдай күренеш күҙәтелмәй. Үзбәк телендә беренсе ижектәге боронғо *а* өнө киң әйтелешле *о* өнөнә күскән. Шуға күрә үзбәк телселәре был күренеште хәҙерге үзбәк теленең орфографияһына индергәндәр: *отаси, онаси*. Ҡылымдарҙың инфинитив формаһы аҙағында ла шул уҡ хәл күҙәтелә: *олмок, келмок* һ.б. Ғәрәп, фарсы телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең аҙағында ла *а* өнө урынына киң әйтелешле *о* өнө ҡулланыла, *аъло* (әғла - отлично), *мехрибон* (миһырбан), *олижаноб* (ғәли йәнәп) һ.б.

Морфологик яҡтан ҡылымдың III зат хәҙерге заман формаһына *-ди* аффиксы ҡушыла: *у кела-ди* (ул килә). Уйғыр телендә лә шул уҡ хәл. Уйғыр һәм үзбәк телдәрендә эйәлек һәм төшөм килештәрҙең аффиксы бер генә төрлө: *-нинг, -ни - боланинг - болани* (баланың - баланы), *отанинг - отани* (атаның - атаны). Шул яҡтан ҡарағанда, үзбәк һәм уйғыр телдәренә татар һәм ҡумыҡ телдәре яҡын тора. Татар телендә ҡарлуҡ телдәренең элементы бар, сөнки, проф. Н.А.Баскаковтың күрһәтеүенсә, иҫке татар теле сығышы яғынан боронғо уйғыр теленә барып тоташа. Сағыштырыу формаһы ла боронғо уйғыр теленән килә. Мәҫәлән, татар телендәге *ат башыдай* формаһы карлуҡ телдәренең элементы. Был форма үзбәк телендә *от бошидай* рәүешле ҡулланыла. Ҡарлуҡ телдәрендә сағыштырыу аффиксының боронғо формаһы *-дак, -док* булған. Уйғыр һәм иҫке татар телдәрендә лә шул уҡ хәл күҙәтелә. Ҡарлуҡ төрки телдәрендә III зат эйәлек аффикслы һүҙҙәрҙең төбәү һәм урын-ваҡыт килештәренең яһалышы бик үҙенсәлекле. Мәҫәлән: *Бухоро шахари-га* (Бохара ҡалаһы-на), *Бухоро шахари-да* (Бохара ҡалаһы-нда). Был килеш формаларында -н элементының төшөп ҡалыуы - төп ҡарлуҡ төрки (үзбәк, уйғыр) телдәренә хас күренеш.

Уйғыр теле өсөн *-дин, -тин* аффикслы сығанаҡ килеш хас: *шәһәр-дин, йол-дин*. Был аффикс шиғри фольклор өсөн характерлы һәм ул ниндәйҙер бер шиғри нәфислек бирә. Уйғыр телендәге *-дин* аффиксын беҙ башҡорт халыҡ ауыҙ тел ижады өлгөләрендә лә күрәбеҙ. Мәҫәлән:

*Алтын ғына йөҙөк фирүзә ҡаш*
*Бохарадин түгел, Хиуадин.*

Уйғыр теленең фонетикаһына үҙенсәлекле сингармонизм хас. Ул шунан тора: аффикстағы и өнөнөң йоғонтоһо арҡаһында *а* өнө йомшара, һөҙөмтәлә *ә* өнө барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, уйғырса: *баш – бәшим*. Шундай уҡ хәл ҡылымдарҙа ла күҙәтелә: *атмаҡ - әтиш*. Уйғыр телендәге был күренеш Европа

телдәрендәге умляутты хәтерләтә [ä]. Тимәк, типологияһы яғынан төрлө булған телдәрҙә лә бер үк фонетик законсалыҡтарҙы бик йыш осратырға мөмкин.

## ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕНДӘ БЕРЕНСЕЛ ҺӘМ ИКЕНСЕЛ ОҘОН ҺУҘЫНҠЫЛАР

Боронғо төрки теле өсөн һүҙҙең беренсе һәм икенсе ижектәрендә өндәрҙең оҙон әйтелеүе характерлы. Был үҙенсәлек ҡайһы бер төрки телдәрендә әле лә һаҡланған. Миҫал өсөн хәҙерге төркмән һәм яҡут телдәрен күрһәтеп үтергә мөмкин. Мәҫәлән, төркмәнсә: *аак, аал* (сифаттар); *ак, ал* (ҡылымдар). Шулай итеп төркмән телендә оҙон һәм ҡыҫҡа һуҙынҡы өндәр һүҙҙең мәғәнәһен айырыуса бер сара булып йөрөй. Шул рәүешле ул Европа телдәрен хәтерләтә. Йәнә лә сағыштырығыҙ: яҡут телендә - *саас* (яҙ), *кыыс* (ҡыҙ), һуҙынҡы өндәрҙең оҙонлоғо ҡаҙаҡ телендә лә сағыла: *оосы*(ошо), *оосында* (ошонда).

Төрки телдәренең күбеһе (бигерәк тә башҡорт, татар, Себер төрки, ҡумыҡ, әзербайжан, төрөк) боронғо төрки телендәге һуҙынҡыларҙың оҙонлоғон юғалтҡан. Шуға күрә, мәҫәлән, татар, башҡорт телдәрендә оҙон һәм ҡыҫҡа һуҙынҡылар бер төрлө ҡыҫҡа әйтелә. Был оҙонлоҡтоң юғалыуы арҡаһында татар, Себер төрки, башҡорт телдәрендә киң һуҙынҡылар *о, ö, а, ä* тарайған һәм *у, ү, и* өндәренә күскән. Уның схемаһы шулай булырға тейеш: о, ö, а, ä > у, ү, и. Шул арҡала боронғо төрки телендәге тар һуҙынҡылар бер ни тиклем киңәйгән, у, ӱ [ү], и > *ö*.

Проф. Ғәлимйән Шараф үҙенең "Длительность сонорных гласных" исемле хеҙмәтендә (был хеҙмәт Ҡазанда сығарылған "Вестник научного татароведения" йыйынтығында баҫылған) боронғо киң һуҙынҡыларҙың тарайыуын шул оҙонлоҡтоң юғалыуынан эҙләй. Ләкин ул үҙенең хеҙмәтендә шунан ары китмәй. Икенсе төрлө әйткәндә, ул ни өсөн боронғо төрки тар һуҙынҡыларының киңәйеүен күрһәтмәй. Боронғо төрки оҙон һуҙынҡыларын яҡут телендә бик асыҡ күреп була. Сағыштырығыҙ:

| Боронғо төркисә: | Яҡутса: |
|---|---|
| jöл | суол |
| jöк | суох |
| бäш | биес |
| бäр | биэр |

Боронғо төрки оҙон һуҙынҡылары яҡут телендә (иэ, уо) саф дифтонгылар булып нығынып ҡалған. Бындай күренеш Европа телдәре өсөн дә характерлы. Сағыштырығыҙ: латинса murus > немецса maur, боронғо немецса Has > немецса Haus, боронғо немецса min, din > немецса mein, dein һ.б.

Оҙон һуҙынҡыларҙың дифтонгыларға әйләнеүе телмәр аппаратының физиологияһына бәйләнгән. Ҡайһы бер төрки (төркмән, ҡаҙаҡ, яҡут) телдәрендә беренсе ижектә һуҙынҡы өндәрҙең оҙон әйтелеүе йәки оҙонлоғо, боронғо төрки теленән килә. Был оҙон һуҙынҡылар беренсел оҙон һуҙынҡылар сафына инә. Яҡут телендәге ҡайһы бер дифтонгылар боронғо беренсел оҙон һуҙынҡыларҙан барлыҡҡа килгән. Ләкин шуны бутарға ярамай: яҡут телендә икенсел дифтонгылар ҙа бар. Улар боронғо төрки тартынҡы һәм

һуҙынҡыларынан барлыҡҡа килгән. Сағыштырығыҙ:

| боронғо төркисә: | | яҡутса: |
|---|---|---|
| тағ | > | тыа (тау) |
| сағ | > | ыар (һауынсы) |
| оғул | > | уол (ул) |

Башҡа төрки (башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, нуғай һ.б.) телдәрендә *аг, ыг, иг, әг* ҡушылмалары ла *ау, әү, ыу, еү* дифтонгыларына әйләнгәндәр. Бындай дифтонгылар саф дифтонгылар түгел, сөнки улар фәҡәт ике (һуҙынҡы һәм тартынҡы) өндөң ҡушылмаһынан барлыҡҡа килгән. Бындай дифтонгылар һүҙгә ялғау ҡушҡанда айырыла: *таг- та-гы > тау - та-уы*. Шуға күрә был телдәрҙәге саф булмаған дифтонгыларҙы дифтонгоидтар тип йөрөтәләр.

## ИКЕНСЕЛ ОҘОН ҺУҘЫНҠЫЛАР

Икенсел һуҙынҡы өндәр һуҙынҡы һәм тартынҡы ҡушылмаһынан барлыҡҡа килгән. Төп төрки һүҙҙәрендә был икенсел оҙон һуҙынҡылар ҡырғыҙ, хаҡас, шор, тува телдәре өсөн бигерәк характерлы. Ә гәрәп, фарсы телдәренән ингән һүҙҙәрҙә уйғыр, үзбәк, төркмән телдәренә лә хас. Сағыштырығыҙ:

| боронғо төркисә: | | ҡырғыҙса: | | хакасса: |
|---|---|---|---|---|
| бағыр | > | боор | // | паар (бауыр) |
| ағыҙ | > | оос | // | аас (ауыҙ) |
| тағ | > | тоо | // | таа (тау) |
| јағун | > | жоон | // | чаан (яуын) |

Боронғо тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙән барлыҡҡа килгән оҙон һуҙынҡылар икенсел оҙон һуҙынҡылар тип атала.

## ТАРТЫНҠЫ ӨНДӘРҘЕҢ ҮҘГӘРЕШЕНДӘ ДӨЙӨМ ТЕНДЕНЦИЯЛАР

Тартынҡы һәм һуҙынҡы өндәрҙең үҙгәреше телдең динамикаһы менән бәйләнгән. Һүҙҙәр, өндәр һәр ваҡыт хәрәкәттә булғанға күрә, төрлө төрки телдәрендә төрлөсә үҙгәреш кисергән. Тартынҡы өндәр өлкәһендә булған үҙгәрештәр уларҙың һүҙ эсендә ниндәй позицияла тороуы йәки ниндәй саҡта эргәләш һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәр бер-береһенә йоғонто яһаған. Был йоғонтоно барлыҡҡа килтереүҙә өндәрҙең сонорлык (яңғырауыҡ) һыҙығы йәки өндәрҙең һаңғырау булыуы бер ни тиклем роль уйнаған.

Төрки телдәрендә ғәҙәттә ике һуҙынҡы араһында торған һаңғырау тартынҡылар күберәк үҙгәрешкә бирелгән. Был хәл бер һүҙҙең һәм эргәләш торған ике һүҙҙең һуҙынҡылары араһында күҙәтелә. Мәҫәлән: боронғо

төркиҙең *алты, анта* формаһы хәҙерге телдәрҙә *алды, анда* рәүешендә йөрөй. Боронғо төрки теле ике хәлдә лә сонор өн эргәһендә тора. Тел белемендә бындай хәлде ассимиляция тип йөрөтәләр.

Һаңғырау *т* өнө ике һуҙынҡы араһында ла *д* өнөнә күсергә мөмкин. Мәҫәлән, боронғо төркисә *атаҡ* > уйғырса *адаҡ* > башҡортса *аяҡ* [айаҡ]. Бындай күренеште яңғырауланыу тип йөрөтәләр. Шуға күрә *атаҡ* һүҙенең *адак* булып китеүе тәбиғи күренеш. Йәнә сағыштырығыҙ: боронғо төркисә *атаҡ* > уйғырса *адаҡ* > хаҡасса *аҙаҡ* > боронғо уйғырса *аҙаҡ* > башкортса *аяк* [айаҡ]. Бындай үҙгәреште бер төрлө схемаға һалырға мөмкин

[т > д > —— > и].

Һаңғырау тартынҡыларҙың һуҙынҡылар уратылышында яңғырауланыуы бөтә төрки телдәре өсөн дә хас. Күпселек төрки телдәрендә был күренеш туҡталған. Ҡайһы бер телдәрҙә (сыуаш, хаҡас, тау-алтай, шор, тува һ.б.) был күренеш хәрәкәтсән. Ә бына көнъяҡ төрки телдәрендә (төркмән, әзербайжан, төрөк һ.б.) фәҡәт *ч* өнө генә яңғыраулана: *биринжи, алажак, гиләжәк*.

Сыуаш телендә яңғырау өн менән йәнәшә торған һәм ике һуҙынҡы араһында һаңғырау тартынҡылар яңғыраулаша. Унда һүҙ бер төрлө әйтелә, икенсе төрлө яҙыла: *пырза гил* (һөйләү телендә), *пырса кил* (яҙыуҙа).

## ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕНЕҢ САҒЫШТЫРМА МОРФОЛОГИЯҺЫ

### §1. ДӨЙӨМ МӘСЬӘЛӘЛӘР

Ҡәрҙәш телдәрҙең грамматик формаларын системалы сағыштырыу юлы менән уларҙың хәҙерге көндә ҡулланылып йөрөтөлгән формаларының килеп сығышын күҙәтеп була. Грамматик формаларҙың килеп сығышын күҙәтеү үҙ сиратында асылда аффикстарҙың барлыҡҡа килеүе менән бәйләнгән.

Беҙгә мәғлүм булғанса, төрки телдәре - агглютинатив телдәр. Һүҙҙең аҙағында төрлө морфологик категорияларҙың кәрәкле аффикстарын эҙмә-эҙ рәүештә йәбештереү агглютинация тип атала.

Агглютинатив телдәрҙең (йәғни төрки телдәренең) һәм бүтән урал-алтай телдәренең грамматик формалары барлыҡҡа килеүен диахроник (йәғни тарихи) планда асыҡлауы еңел. Сөнки аффикстар, бигерәк тә бер нисә элементтан торғандары, тарихи яҡтан бер-береһенә өҫтәлә барыу арҡаһында яһалғандар. Был уңай менән академик Н.Я.Маррҙың гипотезаһы төрки һәм бүтән урал-алтай телдәре миҫалында раҫлана Бер нисә элементтан торған аффикстарҙың (мәҫ., *-га/-гә/, -да/-дә, -ла/-лә*) барлыҡҡа килеүе тураһында Н.Я.Марр шулай тигән:"...окончания нарастали одно на другое, до получения того или иного, ныне цельного, ходячего комплекса, в общей хронологической последовательюсти" (ҡарағыҙ: Марр Н.Я. Кавказские племенные названия и местные параллели. Петроград, 1922, 15-се бит).

Төрки һәм бүтән урал-алтай телдәрендә лә ҡушма аффикстар тап шул юл менән, йәғни төрлө ябай, бер генә элементтан торған аффикстарҙың бер-береһенең өҫтөнә ҡушылып ялғаныуы арҡаһында яһалғандар. Хәҙер шул

аффикстарҙың нисек ялғанып үҫеүен асыҡлап китәйек.

Сағыштырма тарихи планда тикшергәндә, рәт һандарының *-ынчы, -нчы* аффикстарын асыҡлап үтеү кәрәк. Әгәр V - VIII быуаттағы боронғо төрки теленә мөрәжәғәт итһәк, беҙ ошоно күрәбеҙ: *он-ынч, алты-нч* (*-ынч, -нч*). Хәҙерге төрки телдәренең бөтәһенә лә *-ынч* формаһына тағы ла *-ы, -и* ялғана. Ә инде *-ч* элементы урал-алтай телдәрендә күплек күрһәткесе [-ч > -ш > -с] схемаһы булырға мөмкин. Ә инде *-ы, -и* элементы беҙҙә *(е)*- айырыусы элемент, йәғни күптән берҙе күрһәтеүсе форма.

Рәт һандары, ғөмүмән, күплек идеяһы менән бәйләнгән. Сөнки бер генә әйбер булһа, уны рәт һаны менән һанап тороуҙың кәрәге юҡ. Рәт һандары мәғәнәләре яғынан күп әйберҙәр араһынан билдәле берәүһен айырып алыуҙы белдерә. Шуға күрә был мәғәнә *-ы, -и* элементы менән күрһәтелә. Хәҙерге телдәрҙә был бик асыҡ сағыла. Әгәр ҙә беҙ рәт һандарының береһен нығыраҡ айырып күрһәтергә teләһәк, беренсенән, *алты-нч-ы* формаһына тағы ла *-сы* (беҙҙә) аффиксын өҫтәйбеҙ - *алты-нч-ы-сы*. Был форма бигерәк асыҡ мәғәнәне сағылдыра. Ә инде *алты-нч-ы* һүҙенең һуңғы *-ы* элементы ундай мәғәнәне бирә алмай.

Икенсенән, *-ы, -и* элементы үҙ сиратында исемдәрҙең III зат эйәлек аффиксы менән бер сығанаҡтан. III зат эйәлек аффиксының, исемгә ялғанып, эйәлек мәғәнәһен биреүҙән тыш, билдәле әйберҙе айырып күрһәтеүсе функция үтәүен үҙ ваҡытында уғыр-фин телдәрен өйрәнеүсе проф. Бубрих Д.В. әйтеп ҡалдырған (ҡарағыҙ: Бубрих Д.В. Грамматика литературного коми языка. Л., 1949). Сөнки уғыр-фин телдәрендә лә III зат эйәлек аффиксы әйберҙең фәҡәт эйәһе булыуҙы күрһәтеп сикләмәй, ә күп әйберҙәр араһынан билдәле берәүһен айырып күрһәтә. Ни өсөн шулай тигән һорау тыуырға мөмкин. Иң элек шуны әйтергә кәрәк: уғыр-фин телдәре - төрки телдәренә ҡәрҙәш телдәр. Ул телдәр ҙә барыбер урал-алтай ғаиләһенә ҡарай.

Ә ни өсөн рәт һандарының аҙағында *-ы, -и* элементы юҡ? Боронғо төрки телендәге *алты-нч* һүҙенең *н* элементы *-ы, -и* һымаҡ билдәлелек күрһәткесе булып тора. Шуға күрә хәҙерге төрки телдәрендә *-ы, -и* элементы ла, *-н* элементы ла билдәле төшөм килеш аффиксы функцияһын үтәй.

Ә бүтән телдәрҙә рәт һандарының яһалышы ни рәүешле һуң? Мәҫәлән, венгр телендә лә рәт һандарының яһалышы үрҙә әйтелгән дөйөм ҡалыпҡа буйһона. Сағыштырығыҙ: *hat* (алты) - *hat-ad-ik* (алтынсы), *het* (ете) - *het-ed-ik* (етенсе). Был формаларҙың һуңғы *ik* элементы III зат эйәлек аффиксы функцияһын да үтәй. Тик был осраҡта боронғо венгр теленең билдәлелек элементы *g* (*-к*) хәҙерге венгр телендә *j* (*-й*) элементына күскән. Ул да боронғо монгол телдәрендә һәм боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларында билдәле төшөм килештең күрһәткесе булып йөрөй.

Тунгус-манчжур телдәрендә лә рәт һандары шул юл менән яһала, йәғни һанға III зат аффиксы ҡушыла.

Төрки телдәре өсөн үҙенсәлекле бер килеш формаһы бар: *ата-сыз*. Хәҙерге төрки телдәрендә был килеш формаһы тип ҡаралмай. Тарихи яҡтан ҡарағанда, был юҡлыҡ килеш (урыҫса: лишительный падеж) була. Төрки телдәрендә *ата-сыз* формаһы сифаттар сафына индерелә: *йорт-һоҙ* (урыҫса: бездомный). Проф. М.З.Зәкиев был форманы килеш тип ҡарай. Уғыр-фин

телдәрендә лә был типтағы форма килеш тип ҡарала. Унда килеш формаһы ла, сифат формаһы ла бар. Был форманың яһалышы иғтибарға лайыҡлы. Бының нигеҙендә һуҙынҡыға бөткән һүҙҙәрҙәге III зат тартым формаһы тора: *баласы*. Шул формаға күплек күрһәткесе -*з* > -*ҙ* ҡушыла: *баласы-з*, сыуашса *ача-сăр*.

Билдәле булыуынса, күплек мәғәнәһе билдәһеҙлек идеяһы менән бәйләнгән. Ә конкрет был формала күплек күрһәткесе -*з* юҡлыҡты белдерә. Шуға күрә алтай телдәренең бөтәһендә лә -*з* элементын юҡ һүҙе менән алмаштырып була. Юҡлыҡты белдергән -*з* элементы урынына юҡ һүҙен ҡушһаң, III зат эйәлек формаһы һаҡлана. Сыуаш телендә -*сы, -си* рәүешле III зат эйәлек аффиксы юҡ. Мәҫәлән, һүҙҙең нигеҙе тартынҡыға бөтһә: *ывăл* (ул) - *ывăл-ĕ* (улы), ә һуҙынҡыға бөтһә: *ача* (бала) - *ачи* (балаһы). Шулай булыуға ҡарамаҫтан, сыуаш телендә лә юҡлыҡ килеш дөйөм структура ҡалыбы буйынса -*сар* (-сер) аффиксы менән яһала: *илем-сĕр* - *иләм-сез* - *йәм-һеҙ*. Тимәк, юҡлыҡ килештең яһалышы өсөн теге йәки был ҡәрҙәш телдәрҙә шул уҡ аффикстың булыуы мотлаҡ шарт түгел. Сөнки был аффикс башҡа.ҡәрҙәш төрки телдәрҙә бар.

Уғыр-фин телдәрендә лә тап шул хәлде күрәбеҙ. Мәҫәлән, юҡлыҡ килеш уғыр-фин телдәрендә -*та* (-*тә*)* формалары сығанаҡ килеш аффиксынан яһала. Был аффикс хәҙерге манси телендә III зат эйәлек аффиксы вазифаһын башҡара. Мәҫәлән: *сали* (болан) - *сали-тэ* (боланы). Уғыр-фин телдәренең бөтәһендә лә юҡлыҡ килеш -*та* (-*тә*) рәүешле сығанаҡ килеш аффиксынан яһала һәм шуға күплек аффиксы -*л* ҡушыла. Мәҫәлән, манси телендә: *сали-тэ-л* (боланһыҙ). Фәҡәт тик бер хант телендә генә юҡлыҡ килеш бүтән элементтар менән яһала, ләкин бер үк структура ҡалыбы менән. Мәҫәлән, хант телендә III зат эйәлек аффиксы *–л*: *анки-л* (ана-сы). Шул нигеҙгә күплек күрһәткесе -*ы* ҡушыла: *анки-л-ы* (ана-сы-з). Был осраҡта ҡалып бер төрлө, тик элементтары икенсе төрлө килеп сыға. Шул рәүешле төрки телдәрендә юҡлыҡ килеш формаһы III зат эйәлек формаһына күплек күрһәткесе -*з* ҡушылыу менән яһала. Тап ана шул нигеҙҙә -*сыз* (-*сез*) аффиксы барлыҡҡа килгән. Был аффикс хәҙерге төрки телдәрендә "бер бөтөн һәм хәҙерге көндә хәрәкәтсән бер комплексҡа әйләнгән" (ҡарағыҙ: Марр Н.Я. Кавказские племенные названия и местные параллели. Петроград, 1922, 15-се бит.) Бына шуға күрә был аффикс бөтә һүҙҙәр аҙағына ла ҡушыла.

## § 2. ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕНДӘ КИЛЕШ ФОРМАЛАРЫ

**Биреү-йүнәлеш** (дательно-направительный) килеш төрки телдәре өсөн йүнәлеш килештең элементтарға бүленмәй торған -*а* (-*ә*) аффиксы менән билдәләнә. Йүнәлеш килеш мәғәнәһендә был аффикс башҡа урал-алтай (монгол, уғыр-фин) телдәре өсөн хас. Төрки телдәренең бөтәһендә лә -*а* (-*ә*) аффиксы исемдәрҙең I, II зат эйәлек формаһына ҡушыла: *атам* - *атам-а*, *атаң* - *атаң-а* һ.б. Был форма күпселек төрки телдәре өсөн хас. Оғуз төрки телдәрендә (әзербайжан, төркмән, төрөк) -*а* (-э) аффиксы исемдәрҙең

* *Бында □□м артабан да ми□алдар□а Ж.□ Киекбаевты□ лекция ва□ытында □уллан□ан транскрипция□ы □а□лана.*

күплектәге I, II зат эйәлек формаһына ҡушыла: *анамыз-а, ананыз-а*. Был йәһәттән оғуз төрки телдәре – эҙмә-эҙлекле телдәр. Исемдәрҙең III зат эйәлек аффиксы ҡушылмаған һүҙҙәрҙә йүнәлеш килеш үҙенсәлекле яһала. III зат эйәлек аффикслы һүҙҙәр тәүҙә төшөм килешкә ҡуйыла: *атасы-н*. Тик шунан һуң ғына билдәле төшөм килеш формаһына *-а* (*-ә*) элементы ялғана. *Атасы-н* тибындағы ҡыпсаҡ төрки телдәрендәге билдәле төшөм килеш формаһы бер үк ваҡытта йүнәлеш килеш өсөн билдәлелек нигеҙе һанала. Ә инде I, II зат өсөн билдәлелек нигеҙе функцияһын эйәлек формаһы үтәй: *ата-м, ата-ң*. Сөнки эйәлек формаһы ла билдәлелекте белдерә. Был бөтә урал-алтай телдәре өсөн дә хас күренеш. Шуға күрә был телдәрҙә эйәлек аффиксы ҡабул иткән һүҙҙәр, тура тултырыусы булып, билдәһеҙ төп килештә тора алмай. Шулай итеп беҙ *агасы-н-а* тибындағы форманың йүнәлеш килештең билдәле төшөм килеш формаһынан яһалғанын күрәбеҙ. Атасы-н-а тибындағы йүнәлеш килеш ул асылда билдәле төшөм килештең артабанғы үҫеше.

Ҡарлуҡ төрки (үзбәк, уйғыр) телдәрендә был типтағы йүнәлеш килеш формаһына *отаси-ғ-а* тибындағы форма тап килә. Ҡарлуҡ төрки телдәре - ҡыпсаҡ төрки телдәренә яҡын ҡәрҙәш телдәр. Ә ҡәрҙәш телдәрҙә грамматик формалар бер төрлө ҡалып менән яһала. *Атасы-н-а* тибындағы форма *атасы-н* тибындағы билдәле төшөм килештән яһалған кеүек, *отаси-ғ-а* ла билдәле төшөм килештән яһалырға тейеш. Был осраҡта билдәле төшөм килеш формаһы *отаси-ғ* булырға тейеш. Ләкин *-ғ* (*-г*) аффикслы билдәле төшөм килеш төрки телдәрендә юҡ. Шулай ҙа *-ғ* (*-г*) аффикслы билдәле төшөм килеш боронғо төрки һәм боронғо уйғыр телдәре өсөн хас. Монгол телдәрендә лә шул уҡ хәл. Мәҫәлән, боронғо төркисә: *ата-ғ, ана-ғ*, монгол телдәрендә: *аты-ғ, эни-г*. Дөйөм структура ҡалыбы буйынса билдәле төшөм килеш формаһынан хәҙерге төрки телдәрендә йүнәлеш килеш формаһы яһалған кеүек, боронғо төрки телендә лә барыбер *-ғ* (*-г*) аффикслы төшөм килеш формаһында *-а* (-э) элементы ҡушылып яһалған йүнәлеш килеш барлыҡҡа килгән: *ата-ғ-а, ана-ғ-а*.

Хәҙерге төрки телдәрендә, шулай уҡ боронғо төрки телендә йүнәлеш килеш формаһының үҫеше өсөн бер генә төрлө структура ҡалыбы хас. Сыуаш телендә һуҙынҡыға бөткән һүҙҙең йүнәлеш килеш формаһы үҙенсәлеклерәк. Ул *-на* (*-нә*) аффиксы менән яһала: *ача-на* (бала-ға). Был йүнәлеш килеш формаһы сыуаш телендәге *ача-н, хүла-н* тибындағы боронғо төшөм килеш формаһынан яһалған.

Оғуз төрки телдәрендә дөйөм фонетик законлылыҡ буйынса *ғ, г* өндәре *й* өнөнә күсә: *ғ, г* > *j* (*й*). Шуға күрә беҙҙәге *ана-ға* формаһы ул телдәрҙә *ана-ја* рәүешендә нығынған. Артабан *-ғ* (*-г*) аффикслы йүнәлеш килеш хәрәкәтсән бер комплексҡа әйләнгән һәм күпселек төрки телдәрҙә һуҙынҡы өнгә бөткән һүҙҙәргә генә түгел, тартынҡы өнгә бөткән һүҙҙәргә лә ҡушылған: *мал-ға, өй-гә*. Асылда иһә *-ға* (*-гә*) аффиксы һуҙынҡы өнгә бөткән һүҙҙәргә генә ҡушылырға тейеш. Был оғуз төрки телдәре өсөн хас күренеш. Шуға ла оғуз төрки телдәре, сыуаш теленең структура ҡалыбы менән сағыштырғанда, эҙмә-эҙлекле телдәр.

Төрки телдәрендә, ғөмүмән, *-ға* (*-гә*) аффикслы килеш формаһын ҡулланыу буйынса бик күп үҙенсәлектәр бар. Мәҫәлән, яҡут телендә *-ға* (*-гә*), *-ка* (*-кә*) аффикслы килеш формаһы йүнәлеште лә, урынды ла белдерә: *оскуол-ға*

*оғолор баар* (мәктәптә балалар бар) - урын-ваҡыт килеш, *оскуол-ға оғолор кэлбит* (балалар мәктәпкә килде) - йүнәлеш килеш. Шуға ла яҡут телендә *-та* (*-тә*) аффиксլы килеште частичный падеж тип йөрөтәләр. Яҡут телендәге частичный падеж билдәһеҙ төшөм килештең бер төрө. Мәҫәлән: *мас-та кэрт* (утын киҫ). Был килеш фәҡәт бойороҡ формаһында ҡулланыла. Яҡут телендәге частичный падеж ниндәйҙер дәрәжәлә бүтән төрки телдәрендә лә бар. Мәҫәлән: *балынан аша, майынан ҡап*.

Үзбәк һөйләштәрендә киреһенсә *-ға* (*-гә*) аффикслы килеш урын төшөнсәһен, *ә -да* (*-дә*) йүнәлеш төшөнсәһен бирә. Сағыштырығыҙ: *Бухоро-да бараман* (йүнәлеш), *Бухоро-га тураман* (урын-ваҡыт). Быңдай ҡулланылыш үзбәк һөйләштәре өсөн бик тә тәбиғи һанала. Быныӊ тарихи сәбәптәре бар. Үзбәк халҡының составына бик күп монгол ҡәбиләләре ҡушылған. Мәҫәлән, ҡалмыҡ профессоры Ц.Д.Номинханов үзбәк халҡының составында 100-ҙән артыҡ төрлө монгол ҡәбиләләренең ҡатнашып киткәнен күрһәтә. Ул быны бик ныҡ тикшергән, хатта уларҙың ҡайһы районда нисәү икәнен дә һанап сыҡҡан (был хаҡта ҡарағыҙ: Номинханов Ц.Д. Происхождение слова "калмык". Вестник АН КазССР, 1958, № 11). Ә монгол телендә *-да* (*-дә*) аффикслы килеш формаһы ике функция үтәй. Ул урынды ла, йүнәлеш мәғәнәһен дә бирә. Мәҫәлән, бурят телендә *хада-да* формаһы *тауҙа* (урын) һәм *тауға* (йүнәлеш) мәғәнәләренә эйә була. Сағыштырығыҙ: яҡут телендәге *хайа-таа* формаһы ла *тауға, тауҙа* мәғәнәһендә ҡулланыла.

Тува телендә *-да* (*-дә*), *-ға* (*-гә*) аффикслы килеш формаларының ҡулланылышы бик үҙенсәлекле. Мәҫәлән, һөйләмдә ҡылым хәҙерге заманды белдереп килһә, урын-ваҡыт килеш *-да* (*-дә*) аффиксы менән ҡулланыла. Ләкин шул уҡ типтағы һөйләм конструкцияһында ҡылым формаһы билдәһеҙ үткән заманда йәки киләсәк заманда булһа, *-ға* (*-гә*) аффикслы урын-ваҡыт килеш ҡулланыла. Сағыштырығыҙ: *Мен Кызыл-га чурттап тур мен* (хәҙерге заман); *Мен Кызыл-га чурттар мен* киләсәк заман, *Мен Ҡызыл-га чурттап турган мен* (билдәһеҙ үткән заман).

Тува телендәге был факттарҙан шуны күреп була: тимәк, *-ға* (*-гә*) аффикслы йүнәлеш килеш формаһы йүнәлеш килештең төп формаһы һанала. Ә инде яҡут телендә һәм үзбәк һөйләштәрендә урын мәғәнәһен белдереүгә өҫтәмә функцияға эйә була. Тува телендә *-ға* (*-гә*) аффикслы килеш формаһының ҡулланылыуы билдәһеҙлек менән бәйләнгән, сөнки билдәһеҙ үткән заман һәр ваҡыт билдәһеҙлекте белдерә. Киләсәк заман да билдәһеҙлекте белдерә. Мәҫәлән, тунгус-манчжур телдәрендә (эвенк) билдәһеҙ төшөм килеш формаһы, тура тултырыусы булып, ҡылым киләсәк заманда йәки бойороҡ формаһында торғанда ғына ҡулланыла. Бынан тыш, төбәү килеш үҙенең мәғәнәһе яғынан ҙур арауыҡ (пространство) менән бәйләнгән. Шуға күрә ҡайһы бер төрки (яҡут, хаҡас, татар) телдәрендә йүнәлеш килеш аффиксынан һуң билдәһеҙлекте белдергән *-р* элементы ҡушыла. Татар теленең һөйләштәрендә *ми-ңа-р, си-ңа-р* формаларын күҙәтергә була.

**Урын-ваҡыт** килеш төрки телдәрендә нигеҙҙә *-да* (*-дә*) аффиксы менән билдәле: *дала-да, бүлмә-дә*. Боронғо урын-ваҡыт килеш формаһын ҡулланыу буйынса сыуаш теле менән башҡорт теле генә айырыла. Мәҫәлән: *хула-ра // ҡала-ла*. Сыуаш телендәге *-ра* (*-рә*) аффиксы боронғо монгол телдәренән килә.

Был аффикс *-ра* (*-рә*) урта быуаттағы монгол яҙма ҡомартҡыларында һаҡланған. Ә инде *-ла* (*-лә*) аффикслы урын-ваҡыт килеш хәҙерге тунгус телдәрендә бар. Мәҫәлән, эвенк телендә: *урэ-лэ* (тау-ҙа). Урын-ваҡыт килештең -да (-дә) формаһы хәҙерге монгол телдәренә хас күренеш. Миҫал өсөн бурят телен алырға мөмкин. Унда урын-ваҡыт килеш *-да* (*-дә*) аффиксын ҡабул итә. Ләкин бурят телендә *-да* (*-дә*) аффикслы килештең мәғәнәһе киңерәк. Ул урынды ғына белдереп ҡалмай, ә йүнәлеш мәғәнәһен дә бирә. Шуға күрә бурят телендәге *хада-да* (тау-ҙа) тибындағы форма, яҡут телендәге кеүек үк, ике мәғәнәлә (урын, йүнәлеш) йөрөй Урынды һәм йүнәлеште белдереүсе *-да* (*-дә*) аффикслы килеш, яҡут теленән тыш, башҡа төрки телдәрендә лә һаҡланған. Мәҫәлән, был, шул, теге тибындағы күрһәтеү алмаштарына *-да* (*-дә*) аффиксын ҡушып ҡарарға мөмкин: *бында, шунда, тегендә* һ.б. Әйтәйек, шунда китте тип алһаҡ, ул йүнәлеш мәғәнәһен бирер. Ә инде шунда тора тиһәк, ул урынды белдерер ине. Бындай формаларҙы хәҙер рәүештәр сафына индереп йөрөтәләр.

*-да* (*-дә*), *-та* (*-тә*) аффикслы хәҙерге урын-ваҡыт килештең урын һәм йүнәлеш мәғәнәләрен белдереүе уның яһалышы *-га* (*-гә*) аффикслы килештең яһалышы менән бер төрлө булыуы хаҡында һөйләй. Сағыштырығыҙ: *ата-г-а* > *ата-й-а*; *ата-та-а* > *ата-д-а*. Бында *т* > *д* күренеше һуҙынҡылар уртаһында тәбиғи хәл. Ләкин *-т* элементы хәҙерге төрки телдәрендә, шулай уҡ боронғо төрки яҙма ҡомартҡыларында билдәле төшөм килештең аффиксы хоҡуғында һаҡланмаған. Уның ҡарауы *-т* элементы уғыр-фин телдәрендә яңғыҙы ғына билдәлелек күрһәткесе булып йөрөй. Мәҫәлән, финсә: *minu-t* (мине), *sinu-t* (һине): венгрса: *Voram Janös-t* (Янушты көтәм).

**Сығанаҡ килеш** (исходно-отдалительный падеж) ике-өс мәғәнәне аңлата: 1) алыҫлашыу мәғәнәһе - *бүлмәнән сыҡты*. 2) өлөшсәлек төшөнсәһе - *майынан ҡап*, 3) сағыштырыу мәғәнәһе - *айыу бүренән ҙур*.

Был килештең ана шундай мәғәнәләре бер төрки телдәрендә генә түгел, ә бөтә урал-алтай телдәре өсөн дә хас күренеш. Шулай уҡ сығанаҡ килештең яһалыу формаһы ла төрки телдәрендә генә түгел, ә бөтә урал-алтай телдәрендә лә урын-ваҡыт йәки йүнәлеш килештең артабанғы үҫеше икәне ап-асыҡ күренеп тора. Сағыштырығыҙ, сыуаш телендә *хула-ра-н* (ҡала-нан). Ләкин башҡорт телендә сығанаҡ килеш яһаған урын-ваҡыт килеш булмаҫҡа мөмкин, әммә ундай килеш икенсе ҡәрҙәш телдәрҙә була. Мәҫәлән, башҡорт телендә *ҡала-на* формаһы юҡ. Әйтеп киткәнебеҙсә, *-на* аффикслы йүнәлеш килеш сыуаш телендә бар. Мәҫәлән, хула-на формаһы йүнәлеш килеш мәғәнәһен белдерә, артабан, ул формаға *-н* элементы ҡушылып, беҙҙең телдәгесә сығанаҡ килеш барлыҡҡа килгән: *хула-на-н* > *ҡала-нан*[*].

**Төшөм килеш**. *Атаһын* тибындағы билдәле төшөм килештәге һүҙ ғөмүмән тартынҡы өнгә бөтә. Ә инде әзербайжан һәм төркмән телдәрендәге *-ы* аффикслы билдәле төшөм килеш икенсел тора: *атасын-ы* > *атасыны*. Тимәк, төньяҡ төрки телдәрендә билдәле төшөм килеште *-н* аффиксы белдерһә, көнъяҡ төрки телдәрендә шул уҡ вазифаны *-ы* аффиксы үтәй. Шундай һорау тыуырға мөмкин: *-н* элементы ни өсөн төньяҡ төрки телдәрендә билдәлелек

---

[*] *Артабан ҡарағыҙ: Киекбаев Дж. Г. Основы исторической грамматики урало-алтайских языков Уфа Китап, 1996, 133-140-сы биттәр.*

функцияһын үтәй (*атасы-н*) һәм ни өсөн ул көньяҡ төрки телдәрендә билдәлелек мәғәнәһен бирә алмай?

Был урынлы һорау һәм уға яуап бирер алдынан шуны әйтергә кәрәк: *-н* элементы, билдәле төшөм килеш аффиксы булараҡ, фәҡәт төрки телдәре өсөн генә хас түгел, ә уғыр-фин (мәç., мордва, муҡшы, фин) телдәре өсөн дә хас күренеш. Әйтергә кәрәк *-н* элементы эйәлек килеш аффиксы функцияһын да үтәй. Мәçәлән, быны монгол, уғыр-фин телдәрендә күҙәтергә мөмкин. Ә инде *атасы-н-ы* тибындағы формала *-н* элементы әзербайжан, үзбәк, уйғыр телдәрендә тик төшөм килеш өсөн нигеҙ булып тора. Боронғо төрки телендә *-н* элементы саф нигеҙ һүҙгә лә ҡушылған (*ата-н*) һәм һүҙ нигеҙе тартынҡыға әйләнгәс, бында ла *-ы* элементы килеп ҡушылып, төшөм килештәге (*ата-н-ы*) форманы барлыҡҡа килтергән. Ана шул рәүешле төрки телдәрендә *-ны* (*-ни*) аффиксы үçеш алған.

Шулай тиеп, боронғо төрки телендә атан, аған тибындағы төшөм килеш формаһы булған. Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: *-ы* элементы боронғо төрки телендәге *атаᵹ* тибындағы билдәле төшөм килештәге һүҙгә лә ҡушыла алған: *ата-ᵹ-ы* > *ага-й-ы*. Ләкин *-ᵹ* элементы һуҙынҡылар уратымында булғанға күрә *й* өнөнә күскән. Шуның арҡаһында хәҙерге төрөк телендә атайы тибындағы төшөм килеш бар: *ода-йы* (бүлмәне), *тәлибә-йе* (студентты).

Төрөк телендәге һуҙынҡыға бөткән һүҙҙәрҙең билдәле төшөм килеш формаһы боронғо төрки *атаᵹ, анаᵹ* тибындағы нигеҙҙән яһалыуын монгол телдәре факттарынан да күреп була. Мәçәлән, бурят телендә билдәле төшөм килеш формаһы тап шул рәүешле яһалған. Сағыштырығыҙ: *ном-ыᵹ-ы* > *ном-ыйы*, монгол телендә - *ном-ыᵹ* (китапты); боронғо төрки телендә - *аты-ᵹ* (атты) һ.б.

Әйткәнебеҙсә, *-ᵹ* элементының һуҙынҡылар араһында *й* өнөнә күсеүе тәбиғи бер фонетик законлыҡ. Ә инде *-ы* элементы, проф. В.А.Богородицкийҙың фекеренсә, билдәле төшөм килеш аффиксы, III зат эйәлек аффиксы булғанда ла (мәç., *ат-ы*) бер үк сығанаҡтан барлыҡҡа килгән. Ләкин III зат эйәлек аффиксы яҡут телендә *-а* (-э) рәүешендә була. Был күренеш һүҙҙең нигеҙе тартынҡыға бөткән осраҡта күҙәтелә: *ат-а* (аты), *уут* (һөт) - *ут*-э (һөтө). Ә инде *-ы* элементы билдәле төшөм килеш аффиксы вазифаһын үтәгәс, яҡут телендәге *-а* элементы ла шулай уҡ булырға тейеш. Ләкин фәҡәт сыуаш телендә генә нигеҙе тартынҡыға бөткән һүҙҙәр өсөн *-а* элементы билдәле төшөм килеш аффиксы булып йөрөй: *ут-а йĕнерле* (атын эйәрлә), *лаша-на йенерле* (атты эйәрлә). Сағыштырығыҙ: башҡортса *дала-н-ы.*

Көнсығыш төрки телдәрендә тартынҡыға бөткән һүҙҙәрҙең билдәле төшөм килеш аффиксы *-ты* (*-те*) рәүешендә килә. Мәçәлән: *башты, эште, ташты*. Был һүҙҙәрҙә *башт, ташт* билдәлелек нигеҙе булып тора. Шул нигеҙгә артабан *-ы* элементы ҡушылған. Был типтағы төшөм килеш формаһы ла берҙәм структура ҡалыбы менән яһалған. Билдәлелек нигеҙе *-т* (*-д*) билдәле төшәм килеш аффиксы булып тора. Ләкин төрки телдәрендә ул үҙ функцияһын үтәмәй. Уның ҡарауы ул уғыр-фин телдәрендә һаҡланып ҡалған. Ә беҙҙең телдәрҙә уның эҙҙәрен генә төçмөрләп була. Мәçәлән: *аçт, әçт, алд, арт.*

**Эйәлек килеш**. Төрки телдәрендә эйәлек килеш аффиксының түбәндәге варианттары бар: *-ның* (*-ниң*), *-тың* (*-тиң*), *-ың* (*-иң*), *-ын* (*-ин*), *-ы* (*-и*). Ә инде -

*ны* (*-ни*) аффикслы эйәлек килеш формаһы билдәле төшөм килеш формаһынан үҫкән. Шуға күрә был ике килеш үҙҙәренең мәғәнәһе яғынан бер-береһе менән ҡушыла (урыҫса әйткәндә: перекрещивается). Был ике килештең икеһе лә билдәлелек идеяһы менән бәйләнгән. Айырма тик шунда: билдәле төшөм килеш тултырыусының билдәле булыуын белдерә, ә эйәлек килеш аныҡлаусының билдәле икәнен аңлата. Эйәлек килештең яһалышы бик ябай. Нигеҙ һүҙгә билдәлелек күрһәткесе *-н* ҡушыла: *бала-ны-ң, китап-н-ы-ң*.

Төнъяҡ Кавказ төрки (мәҫ., ҡумыҡ, ҡарасай-балҡар) телдәрендә *-ның* (*-ниң*) аффикслы эйәлек килеш формаһы юҡ. Уның урынына фәҡәт *-ны* (*-ни*) аффикслы эйәлек килеш кенә бар. Тимәк, был телдәрҙә эйәлек килеш менән билдәле төшөм килеш формаһы тап килә. Мәҫәлән: *бала-ны китабы*. Был осраҡлы хәл түгел, ә ул дөйөм урал-алтай телдәренә хас күренеш тип ҡарарға кәрәк. Ҡайһы бер уғыр-фин телдәрендә лә шул хәлде күрәбеҙ. Мәҫәлән, мордва, Балтик буйы уғыр-фин телдәрендә эйәлек килеш менән төшөм килеш өсөн бер генә форма бар.

Төнъяҡ Кавказ төрки телдәрендә һүҙҙәр эйәлек аффиксын ҡабул итһә, төшөм килеш һәм эйәлек килеш аффикстары *-ы* (*и*) рәүешендә генә килә. Мәҫәлән, ҡарасай-балҡар телендә: *ата-м-ы таныдым* (төшөм килеш), *ата-м-ы китабы* (эйәлек килеш), һуҙынҡыға бөткән һүҙҙәрҙең *-ы* аффикслы эйәлек килеш формаһы оғуз төрки (мәҫ., әзербайжан) телдәрендә лә күҙәтелә. Тимәк, эйәлек килештең аффиксы *-ы* (*-и*). Монгол телдәрендә лә беҙ шул уҡ хәлде күрәбеҙ. Халха-монгол телендә *-ы* (*-и*) элементы эйәлек килеш аффиксы булыу менән бер рәттән билдәле хәлдә төшөм килеш аффиксы вазифаһын да башҡара. Шуға күрә ҡарасай-балҡар телендәге хәл осраҡлы түгел, ә дөйөм алтай телдәре өсөн хас күренеш.

Оғуз төрки телдәрендә тартынҡыға бөткән һүҙҙәрҙең эйәлек килеш формаһы ябай яһала. Мәҫәлән, китаб-ы тибындағы формаға *-н* (*-ң*) элементы ҡушыла. Әзербайжан телендә, *китаб-ы алдым* (төшөм килеш), *китаб-ы-н сахыпасы* (эйәлек килеш). Һүҙҙәр һуҙынҡыға бөткән осраҡта дөйөм төрки телдәренә хас булған *-нын* аффикслы эйәлек килеште күрәбеҙ: *ата-нын китабы*. Ләкин шуны ла әйтергә кәрәк: оғуз төрки телдәрендәге китабың, китабын тибындағы эйәлек килеш формаһы, бөтә төрки телдәрендәге шикелле, II зат эйәлек менән тап килә. Мәҫәлән, *сенин китабын* тибындағы форма барыбер эйәлекте белдерә, ләкин зат сфераһында сағыла.

## § 3. ИСЕМДӘРҘЕҢ ЭЙӘЛЕК ФОРМАҺЫ

*Китабың, китабын* тибындағы эйәлек килеш формаһының нигеҙендә билдәле төшөм килеш формаһы ята. Ләкин был типтағы эйәлек килеш формаһы II зат тартым (эйәлек) формаһы менән тап килә.) Ә инде II зат эйәлек формаһының нигеҙендә лә барыбер *китабы* тибындағы билдәлелек нигеҙе ята. Был инде фәҡәт II зат менән сикләнмәй, I, II, III заттарҙың һәммәһендә лә *-ы* элементлы нигеҙ ята. Сағыштырығыҙ: *китаб-ы-м, китаб-ы-ң* (*-н*), *китаб-ы*. Артабан күплектә *-ы* элементы һәр бер тартынҡы өндән һуң ҡушыла бара: *китаб-ы-б-ы-ҙ* (йәки *китаб-ы-м-ы-з*), *китаб-ы-ғ-ы-ҙ* (йәки *китаб-ы-ң-ы-з*), *китаб-ы*.

III заттағы, мәҫәлән, *бала-сы* формаһында, *-сы* аффиксы ике элементтан тора (*с-ы*). Уларҙың икеһе лә III заттағы эйәлек аффиксы. Мәҫәлән, хаҡасса: *ада-зы, бала-зы*. Бындай формалағы *с* йәки *з* элементы яңғыҙы ғына ла уғыр-фин (мәҫ., удмурт һәм коми) телдәрендә III зат эйәлек аффиксы функцияһын үтәй. Ә инде төрки телдәрендә с элементы үҙенең эйәлек аффиксы мәғәнәһен юғалтҡан һәм, тартынҡы нигеҙ яһалып, уға *ы* элементы ҡушылған.

Сыуаш телендә тартынҡыға бөткән һүҙҙәр өсөн *-ан, -ин,* һуҙынҡыға бөткән һүҙҙәр өсөн тик *-н* аффикслы эйәлек килеш формаһы бар. Мәҫәлән: *юлташ-ан кӗнеки* (иптәштең китабы), *ача-н кӗнеки* (баланың китабы), *лаша-н ури* (аттың аяғы). Был йәһәттән, йәғни эйәлек килеш формаһы буйынса, сыуаш теле уғыр-фин (мәҫ., фин, мордва) телдәренә яҡын тора. Ул телдәрҙә лә фәҡәт *-н* аффикслы эйәлек килеш формаһы ҡулланыла. Мәҫәлән, финсә: *kinja-n hinta* (китап-тың хаҡы). III зат эйәлек аффиксы ҡабул иткәндә лә сыуаш телендә эйәлек килеш аффиксы фәҡәт *-н*: *ача* (бала) - *ачи* (балаһы), *ач-и-н кӗнеки* (балаһының китабы).

## ТӨРКИ ТЕЛДӘРЕНЕҢ САҒЫШТЫРМА ГРАММАТИКАҺЫ

### АЛМАШТАР

**Зат алмаштары**. Күп кенә төрки телдәрендә I, II зат алмаштары ла үҙенсәлекле үҫеш алған. Төп һәм эйәлек килештәге I, II зат алмаштарының тар һуҙынҡыһы (*и, е*) йүнәлеш килештәге киң (*а*) һуҙынҡыға үҙгәрә (*и, е* > *а*). Был күренеш (и >а) монгол телдәрендә лә төрки телдәрендәге ҡалыпҡа тура килә, мәҫәлән, бүрәтсә:

Төп килеш *ши* (һин)
Эйәлек килеш *ши-н-ий* (һинең)
Йүнәлеш килеш *ша-м-да* (һиңә)

I, II зат алмаштарындағы *и* элементының йүнәлеш килештә *а* булып китеүе билдәһеҙлек идеяһы менән бәйләнгән. Әйтергә кәрәк, йүнәлеш килеш ҙур пространствоны күҙ уңында тота. Йүнәлеш килештең билдәһеҙлек менән бәйләнгән булыуын иҫемдәрҙә лә күреп була. Төрки (башҡорт, ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ, татар) йәнле телдәрендә билдәһеҙ бер йүнәлеште белдергән хәлдәрҙә йүнәлеш килештең аффиксы булмай, мәҫәлән: *ул Ҡазан китте*. Шул рәүешле билдәһеҙ йүнәлеш килеш барлыҡҡа килгән. Был осраҡлы хәл түгел, әлбиттә.

Билдәһеҙлекте белдергән хәлдәрҙә зат алмаштарындағы *и* элементының *а* элементына үҙгәреүе ҡайһы бер уғыр-фин (венгр, Балтик буйы) телдәре өсөн дә характерлы. Мәҫәлән, эстон телендә зат алмаштарының ике (тулы һәм ҡыҫҡа) формаһы бар: *mina-ma* (мин), *sina-sa* (һин), *tema-ta* (ул). Быларҙың тулы формаһы логик баҫым булған ваҡытта ғына ҡулланыла, сөнки логик баҫым билдәлелек менән бәйләнгән. 1). *Nima soidan homne linn-a*. 2). *Мин иртәгә ҡалаға барам*. Эстон һәм фин телдәрендә, халыҡ йырҙарында һәр ваҡыт *ma, sa* формалары ҡулланыла.

Сыуаш телендә лә I, II зат алмашының ике (тулы, ҡыҫҡа) формаһы бар, мәҫәлән: *эп - эпе* (мин), *эс - эсе* (һин). Сыуаш теленең грамматикаһында был алмаштарҙың ике формаһы ла ҡулланылыуы тураһында белешмә бирәләр.

Ләкин йәнле һөйләү телендә зат алмаштарының тулы һәм ҡыҫҡа формаһын ҡулланыу тап эстон телендәгесе. Логик баҫым алмашҡа төшкәндә, уның тулы формаһы (*эпӗ, эсӗ*), логик баҫым төшмәһә, зат алмашының ҡыҫҡа формаһы (*ӗп, эс*) ҡулланыла. Сағыштырығыҙ: 1). *ӗп ыран хула-на каятат* (мин иртәгә ҡалаға китәм); 2). *ыран хула-на эпе ҡаятат* (иртәгә ҡалаға мин китәм). Зат алмашының был рәүешле ҡулланылышы Башҡортостанда йәшәгән сыуаштарҙың һөйләү телендә күҙәтелә.

Төрки телдәрендә, ғөмүмән, урал-алтай телдәрендә I, II зат алмаштарындағы составындағы н элементы алмаштың тамырына ҡараған элемент түгел. Ул асылда билдәле бер шәхесте индивидуалләштереү өсөн кәрәк булған билдәлелек күрһәткесе.

**Күрһәтеү алмаштары**. Зат алмаштары менән күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәрешендә бер ниндәй ҙә айырма юҡ. Бөтә хәлдәрҙә лә төп килештән башҡа килештәрҙә килеш аффикстары *-н* элементы менән яһалған нигеҙгә ҡушыла. Мәҫәлән, *шул* күрһәтеү алмашының эйәлек килеш формаһы булып *шун-ның* тора. Айырма тик шунда: *-н* элементы күрһәтеү алмаштарының төп килеш формаһында нығынмаған. Күрһәтеү алмаштарының составындағы *-н* элементы фәҡәт билдәлелек төшөнсәһе менән бәйләнгән*. Зат алмаштарындағы кеүек күрһәтеү алмашының ҡайһы берҙәрендә төп килештә *-л* элементы бар. Мәҫәлән: *шул, был*; ҡырғыҙса: *ушул*; ҡаҙаҡса: *осо*. Төрки телдәренең ҡайһы берҙәрендә күрһәтеү алмаштары составында *-л* элементы юҡ.

Күрһәтеү алмаштарының йүнәлеш килеш формаһы. Башҡорт телендә күрһәтеү алмаштарының йүнәлеш (төбәү) килеше ҡаҙаҡ, ҡарағалпаҡ телдәрендәге структура ҡалыбына тап килә. Айырма тик шунда: *у* өнө менән *а* өнө сиратлаша (*ул - аға*). Татар телендә билдәһеҙлек күрһәткесе *-р* ҡуйыла, мәҫәлән: *миңар, сиңар*. Йүнәлеш килеш ҙур пространство менән бәйләнеп билдәһеҙлекте белдереү сәбәпле татар теленең йәнле һөйләштәрендә зат һәм күрһәтеү алмаштары ҡушылған. Әлбиттә, был осраҡлы хәл түгел. Бындай уҡ күренеш яҡут телендә лә күҙәтелә. Мәҫәлән, яҡут телендә тартым (эйәлек) аффикслы һүҙҙәргә төбәү килештә *-р* элементы ҡушыла. Сағыштырығыҙ: *аға-м* (атайым) - *аға-ба-р* (атайыма), *аға-ң* (атайың) - *аға-ға-р* (атайыңа).

**Эйәлек алмаштары**. Төрки телдәрендә I, II зат эйәлек алмаштары ике төрлө яһала: 1). эйәлек килеш ялғауына (*-иң, -ин; -ник, -ың, -ын, -ның* һ.б.) *-ки, -ке* аффиксы ҡушыла, мәҫәлән, уйғырса: *мен-иң-ки* (минеке), *биз-ниң-ки* (беҙҙеке), ҡумыҡса: *биз-ин-ки, сиз-ин-ки,* төркмәнсә: *биз-иң-ки, сиз-иң-ки,* 2). билдәле төшөм килеш ялғауына (*-ни. -не, -и, -е, -ны, -ы*) *-ки, -ке* аффиксы ҡушыла, мәҫәлән, башҡортса: *мин-е-ке, һин-е-ке, ун-ы-ҡы*, татарса: *мин-е-ке, син-е-ке, ан-ы-кы*. Тағы ла, башҡорт һәм татар телдәрендә эйәлек алмашының икенсе төрлөрәк формаларын да осратабыҙ, мәҫәлән, татарса: *без-не-ке, сез-не-ке,* башҡорт һөйләштәрендә *беҙ-е-ке, һеҙ-е-ке* (әҙәби телдә: *беҙҙеке, һеҙҙеке*). Быларҙың барыһын да законлы күренеш тип ҡарарға кәрәк, сөнки төрки телдәрендә эйәлек килеш тә, төшөм килеш тә, дөйөм нигеҙҙән яһалып, билдәлелек төшөнсәһен белдерә. Айырма тик шунда эйәлек килеш эйәлектең

---

* *-н элементыны□ т□п функцияһы □□м уны□ урал-алтай телд□ренд□ таралыу сиге тура□ында тулы м□□л□м□т Ж.□. Киекбаев «Основы исторической грамматики урало-алтайских языков» (Уфа: «Китап», 1996) исемле хе□м□тене□ 190 - 191-се бб. бирел□ (Р.А.).*

билдәлелеген белдерһә, мәҫәлән, төркмәнсә: *ат-ың ыз-ы* (аттың эҙе), төшөм килеш тура тултырыусының билдәлелеген аңлата, мәҫәлән, төркмәнсә: *ат-ы алдым* (атты алдым).

Яҡут телендә тарихи яҡтан эйәлек алмашы булған форма зат алмашының функцияһын үтәй, мәҫәлән: *биһиги* (беҙ) < *бизики, эһиги* (һеҙ) < *сәзики*. Ҡайһы бер тюркологтар (мәҫәлән, О. Беттлингк) яҡут телендәге был алмаштарҙың килеп сығышын шулай аңлатырға тырыштылар: *биһиги* < *бин-сән* (ике), *эһиги* < *сән-сән* (ике). Ләкин был ҡараш дөрөҫкә тап килмәй. Яҡут телендәге *биһиги, эһиги* формалары - тарихи яҡтан эйәлек алмаштары. Ә эйәлек алмаштарының зат алмашы булып аңланыуы телдәрҙә ғәҙәттәге бер күренеш булып һанала.

**Һорау алмаштары**. Һорау алмаштары ике төргә бүленә: 1). Зат өсөн (йәки кешеләр өсөн) күпселек төрки телдәрендә ким, башҡорт һәм татар телдәрендә *кем*, сыуашса *кам*, туваса *кым*; 2). әйбер һәм кешенән башҡа йәнле предметтар өсөн *нә, ни, нимә, нәмә, нәрҫә, нәҫтә, мен, чү / чүү, ноо, туох* һ.б.

Тува телендәге *чү / чүү* (нимә) алмашы, бер ни тиклем фонетик үҙгәрешкә бирелеп, монгол телдәрендәге *йүү* (орфографияла юу) алмашынан барлыҡҡа килгән. Сыуаш телендәге *мен* (нимә) алмашы ла фин-уғыр телдәрендәге әйбер өсөн күрһәтеү алмашынан бик үк айырылмай.

Зат өсөн булған һорау алмашының беренсе элементы (*ки, ка, кә*) күпселек урал-алтай телдәре өсөн бер төрлө. Уғыр-фин телдәрендә лә *ки, ке* зат өсөн булған һорау алмашы. Тунгус-манжур телдәрендә зат өсөн булған һорау алмашы *ни* (кем).

Килеп сығышы яғынан зат өсөн булған һорау алмашы билдәлелекте белдергән аффикстан барлыҡҡа килгән, мәҫәлән, эвенки телендә: *мин-ңи* (мине-ке), *син-ңи* (һине-ке). Тунгус телдәрендә *ңи* элементы зат өсөн булған һорау алмашы функцияһын үтәгән кеүек, төрки телдәрендәге *мини-ки* формаһының *ки* элементы ла һорау алмашы функцияһын башҡара.

Төрки телдәрендә *ки* элементына *м* ҡушылған, ә монгол, уғыр-фин телдәрендә *н* ҡушылған, мәҫәлән төрки телдәрендә *ким*, монгол телдәрендә *хен*, финсә *кен*, ләкин эстонса *кес*.

Әйбер өсөн булған һорау алмашы ла (нимә, нәмә) бер үк структура ҡалыбы менән яһалған. Сағыштырығыҙ: *ки-м/ке-м/ка-ы*, *ни-м*(*ә*)/*нә-м*(*ә*) - төрки телдәрендә; *хэ-н* (кем), *йүү* (нимә), *йүү-н* (билдәһеҙ әйбер) - монгол телдәрендә. Билдәле булыуынса, *н* һәм *м* элементының икеһе лә урал-алтай телдәрендә билдәле төшөм килеш аффиксы функцияһын үтәй. Әйткәндәй, *м* элементы шул уҡ предметтың үҙенә хас булғанлығын белдереүсе, йәғни предметты индивидуалләштереүсе күрһәткес. Ә, *м* элементы булмаған осраҡта, төрки телдәрендә предметты абстрактлаштырыусы *ки* күрһәткесе бар, мәҫәлән: *ямғыр шул тиклем шәп яуа ки*. Ҡайһы бер хәлдәрҙә *м, ки* элементары бер мәғәнәлә йөрөй.

Уйғыр, үзбәк, башҡорт телдәрендә ҡулланылған *нимә* формаһы монгол телдәрендәге *йуу-м* һәм *йум-а* алмашы менән бер үк структура ҡалыбы буйынса яһалған. Төрки телдәренең күбеһендә ҡулланылған *нә* йәки *нәмә* формаһы күберәк билдәһеҙлек төшөнсәһен бирә. Шуға күрә башҡорт телендә *бер нәмә, күп нәмә* тип һөйләгәндә, һүҙ әлбиттә, билдәһеҙ әйбер *нәмә* тураһында бара. Тимәк, *нә* рәүешле алмаш билдәһеҙлекте белдергәнгә күрә, уның аҙағына

билдәһеҙлекте белдергән элемент ҡушыла ала, мәҫәлән: *нә-р-сә*. Был алмаштағы *р, с* элементары төрки телдәрендә башҡа һүҙҙәрҙә лә (*нә-с-тә*) һәм уғыр-фин телдәрендә лә алмаштар составында (эстонса *ме-с* - нимә, удмуртса *ма* - нимә, *ма-р* - нимә) осрай.

Ғәҙәттә, киң һуҙынҡы һәр ваҡыт билдәһеҙлекте белдерә. Сағыштырығыҙ: сыуашса *ма* (почему?), *мен* (что?); эстонса *mas* (что?), *kes* (кто?), *kas* (что ли?). Шул рәүешле һорау алмаштарының яһалышы мәсьәләһендә бөтә урал-алтай телдәрендә тиерлек, беҙ структура ҡалыбы яғынан берҙәмлекте күрәбеҙ. Шуға ла *нәҫтә, нәрҫә* тибындағы һорау алмаштарының яһалышы осраҡлы күренеш түгел [1, с. 255-256].

## ҺАНДАР

Һан төшөнсәһе бик ныҡ абстрактлашҡан төшөнсә, сөнки уның нигеҙендә матди әйбер юҡ. Шуға күрә кешеләрҙең тарих таңында һандар төрлө юлдар менән яһалғандар һәм һан төшөнсәһе конкрет күренеп торған әйбергә оҡшатып иҫәпләүҙән барлыҡҡа килгән. Ф. Энгельс үҙенең бер хеҙмәтендә «кешенең ҡулындағы ун бармаҡ боронғо замандарҙа иң беренсе арифметик операция яһау өсөн хеҙмәт иткән» тип әйтеп китә. Академик Гордлевский В.Г. [Грамматика турецкого языка. М., 1928] кешенең аң дәрәжәһе үҫешенә бәйләп һандарҙың барлыҡҡа килеүендә бер нисә этапты күрһәтә, мәҫәлән: 10 этабы, 20 этабы, 30 периоды... В.А. Гордлевский үҙенең был хеҙмәтендә «50 һаны периоды бик оҙаҡ дәүерҙәр йәшәгән» тип әйтә. Шуға нигеҙләнеп, ул төрки телдәрендә *элли / илле/алла* һанының килеп сығышы *эл, элиг* һүҙҙәренә барып тоташа тип күрһәтә. Ә инде уғыҙ-төрки телдәрендә *эл* һүҙе, боронғо төрки телендә *элиг* һүҙе *ҡул* тигән һүҙ. Шуныһы ҡыҙыҡлы: башҡа төрки телдәрендә *эл* һүҙе ҡулланылмаған, ләкин башҡорт телендә *иле* (мәҫәлән: *бер иле, ике иле, өс иле* һ.б.) һүҙе бар. Әйтергә кәрәк, *илле* һүҙе күпселек төрки телдәрендә ике *л* менән ҡулланыла. Сыуаш телендә иһә *иле* һүҙенең өс варианты бар: *аллӑ /алӑ /ал*. Сыуаш телендә фонетик яҡтан боронғо тар һуҙынҡыларҙың (*е, и*) *а* өнөнә күсеүе тәбиғи хәл. Сағыштырығыҙ: *бир* > *парь, илле* > *аллӑ* һ.б.

Сыуаш телендәге *алӑ* формаһы һис шикһеҙ боронғораҡ форма һанала. Ә инде һүҙҙә ике *л* өнө ныҡ иғтибар менән иҫәпләнгән форманан барлыҡҡа килгән, мәҫәлән: *беррәү, иккәү, өссәү, һиггеҙ, туғғыҙ*. Тимәк, иғтибарлап иҫәпләгәндә, һандарҙың уртаһында килгән тартынҡы өн оҙоная, икәүгә әйләнә. Күпселек төрки телдәрендә (уйғыр, үзбәк, әзербайжан һ.б.) хәҙерге көндә был һандарҙың фәкәт оҙонайған формаһы йәшәй. Сағыштырығыҙ: әзербайжанса *сәггиз, доггуз, йәдди*, уйғырса *сәккиз, токкуз*; үзбәксә *саккиз, тәккиз* һ.б. Әзербайжан, уйғыр телдәрендә бер *к* менән йөрөгән һан юҡ.

Әйберҙе иғтибар менән һанағанда һандарҙың көсәйтеү формаһы монгол телдәрендә лә бар. Мәҫәлән, бүрәт телендә берҙәр һанының аҙағында *н, ң* элементары бар: *гурбаң* (өс), *дөрбэң* (дүрт), *табаң* (биш). Ә инде тиҙ һанаған саҡта һандарҙың аҙағында *ң* элементы булмай: *гурба, дөрбэ, таба*. Монгол телдәрендә ң элементы билдәлелек күрһәткесе функцияһын үтәй һәм исемдәр аҙағына ла ҡушыла. Ләкин исемдәр билдәһеҙ төшөм килештә торһа, *ң* элементы бөтөнләй булмай, мәҫәлән: *мориң* (ат), *мори тахалка* (ат дағалатыу). Монгол телдәренең факттарынан сығып, күпселек төрки телдәрендә һандарҙың тартынҡы

өнө оҙонайып, һис шикһеҙ билдәлелек, идеяһы менән бәйләнгән тип ҡарарға кәрәк.

**Ҡайһы бер һандарҙың килеп сығышы**. Төрки телдәрендә илле һүҙе *ҡул* һәм *биш бармаҡ* мәғәнәһен белдерә. Шулай уҡ *отуз, утыҙ, утыҙ, вăтăр* формаларының *от, ут* элементы боронғо ваҡытта өс һанын белдергән. Хәҙерге манси телендә лә *ват* өс тигән һүҙҙе аңлата. Ә, *отуз, утыҙ, утыҙ, вăтăр* формаларының һуңғы элементы *ыҙ* (*ыр*) күплек күрһәткесе булып тора. Көньяҡ төрки телдәрендә дүрт һүҙенең *т* элементы ла күплек күрһәткесе функцияһын үтәй. Һандарҙың яһалышында төрки һәм монгол телдәрендә лә берҙәм ҡалып күҙәтелә. Мәҫәлән, ҡырҡ һүҙенең беренсе элементы булып *ҡы/хе/хо* иҫәпләнә. Сағыштырығыҙ: монголса *хо-р* (*ин*) - 20, төрки телдәрендә *ҡыр/-ығ* (20 ике тапҡыр) - 40. Ҡарасай-балҡар телендә *ҡырыҡ* (40) һүҙе юҡ, унның урынына *эки жыйырма* формаһы ҡулланыла.

Көнсығыш төрки телдәрендә 20 һанынан башлап башҡа һуңғы унлыҡтар (тиҫтәләр) һаны аналитик юл менән яһала, йәғни берҙәр һанына ун һүҙе ҡушыла, мәҫәлән: яҡутса *түөрт уон* (40), *биэс уон* (50), *алта уон* (60), *сэттэ уон* (70), ойротса *увон* (30), *төртон* (40), *бешон* (50), *алтон* (60) һ.б. Ә инде *алтым-ыш* (60), *етем-ыш* (70), һандарындағы -*ыш* ялғауы күп һан мәғәнәһен белдерә. Ҡайһы бер, мәҫәлән, *алты* (яҡутса *алта*), *ете* (яҡутта *сэттэ*), *егерме* (ҡырғыҙса *йыйырма*) һ.б. һандарҙың -*ы, -е, -а*, элементы уларҙы айырып күрһәтеү өсөн ялғанған һәм ул (-*ы, -е, -о*) III зат тартым аффиксы менән бер сығанаҡтан.

**Һан төркөмсәләре**. Төрки телдәрендә һандарҙың шундай төркөмсәләре бар: *төп, йыйыу, бүлем, рәт* һәм *сама* һандары, һан төркөмсәләренең мәғәнәһен, йәғни нимә аңлатканын әйтеп тормайым. Был хаҡта китаптарҙа яҙылған. Беҙ бары һәр һан төркөмсәһендәге иғтибарға лайыҡлы күренештәргә генә туҡталып китмәксебеҙ. Әйтәйек, алтмыш, етмеш һандарының килеп сығышы буйынса, тюркологияла шундай ҡараш бар: -*мыш, -меш* аффиксы ҡасандыр *ун* (10) һанын белдергән [3, 93-сө б.].

**Йыйнау һандары**. Уларҙың яһалышында шундай үҙенсәлек бар: мәҫәлән, *ике, ете, алты* һандары тар һуҙынҡыға бөтә, ләкин йыйнау формаһын алғанда уларҙың нигеҙендә киң һуҙынҡы *а, ә* күҙәтелә. Сағыштырығыҙ: *берә, икә, өсә, дүртә, алта* һ.б. Ә һүҙҙәрҙең *а, ә* нигеҙенә боронғо заманда *ғ, г* элементы ҡушылыр булған. Боронғо төрки телендәге *ғ, г* элементы ҡайһы бер телдәрҙә *й, э* өндәренә күскән: *ғ, г* > *й, э*. Тарихи яҡтан ҡарағанда, <u>*ғ, г*</u> элементы - күплек күрһәткесе, ул иҫке төрки яҙмаларында һаҡланған. Шуға күрә йыйнау һандарының аффиксы *ғ, г* тип шикләнмәйенсә әйтеп була. Иғтибар итегеҙ: *ғ, г* элементының тарихи яҡтан күплек күрһәткесе икәнен шунан да күреп була: бер генә төрки телендә лә *һигеҙ, туғыҙ* һандарынан -*ау, -әү* аффиксы ярҙамында йыйнау формаһы яһалмай, сөнки был һандарҙың аҙағында күплек күрһәткесе -*ҙ* бар. Башҡа алтай телдәрендә лә йыйнау һандары күплек күрһәткесе ярҙамында яһала, мәҫәлән, монгол телендә: *гурав*(өс), *гурв-уу-л* (өсәү). Тимәк, *л* элементы - дөйөм алтай күплек күрһәткесе. Боронғо төрки -*аг, -әг* ҡушылмаһы яҡут телендә -*ыа* (-*иэ, -уо, -үә*) формаһын биргән: *алтаг* > *алт-ыа* (алтау), *таг* > *тыа* (тау) һ.б.

**Бүлем һандары**. Был төркөмсә - һандарҙың үҙенсәлекле күплек

формаһы. Бүлем һандары күплек төшөнсәһе менән бәйләнгән, сөнки улар мәғәнәһе яғынан күплек идеяһын белдерә. Бүлем һандарында күплек күрһәткесен р, ш элементы үтәй, ә инде бүлем һанының а, ә элементы менән яһала:

бер-ә
ике-ш-ә } +Р
алты-ш-а
үн-а

Ҡайһы бер төрки (ҡумыҡ, ҡарасай-балҡар) телдәрендә тартынҡы нигеҙле һандарҙың да бүлеү формаһы *-шар, -шәр* аффиксы менән яһала: *оньшар*. Ҡайһы бер төрки телдәрендә фәҡәт, *һикһән, туҡһан* булып йөрөгән һандар ҙа бәғзе төрки телдәрендә бүлем аффиксын (*-шар, -шор*) ҡабул итә. Бынан шуны күреп була: боронғо замандарҙа *сиксәнеш, туксаныш* һандары ҡулланылған. Тимәк, *ш* элементы һис шикһеҙ күплек күрһәткесен үтәгән. Был хәл ҡылымдарҙың уртаҡлыҡ йүнәлешендә лә сағыла: *йүгере-ш-еү* (бер нисә кеше йүгерә).

Исемдәрҙең күплек формаһы ла барыбер шул уҡ ҡалып менән яһалған Әйтәйек, һуҙынҡыға бөткән һүҙҙәргә башта дөйөм алтай күрһәткесе *-л* ҡушылған. Мәсәлән, эвен телендә, *моо* (ағас) *-моо-л* (ағастар), *адал* (ау) - *адал-а-л* (ауҙар).

Төрки телдәрендә күплек аффиксы бер нисә элементтың бер-береһенә өҫтәлә барыуы арҡаһында яһала, мәсәлән: *ата-л-а-р* йәки *алты-ш-а-р*. Был һүҙҙәрҙә бер түгел, ике күплек күрһәткесе бар: тәүгеһендә *-л, -р,* икенсеһендә *-ш, -р*. Ошо миҫалдарҙан сығып һүҙ йөрөткәндә, төрки һәм ғөмүмән, алтай телдәрендә күплек күрһәткесенең тарихи үҫеше хаҡында академик Н. Я. Марр әйткән фекер менән килешмәү мөмкин түгел: «...окончания мн. числа нарастали одно на другое, до получения того или иного, ныне цельного, ходячего комплекса, в общей хронологической последовательности» [4, с. 15].

Төрки телдәрендә һәм ғөмүмән, урал-алтай телдәрендә исемдәрҙең ике төрлө күплек формаһы бар: 1). Сифат яғынан күплек: *китап-тар*; 2). Коллектив күплек: *ағайым-дар*. Ошонда уҡ сифаты яғынан бер төрлө булмаған әйберҙәрҙе йыйнап күрһәтеү күплеген дә иҫтә тоторға кәрәк: *Фатима-лар, Фәрит-тәр* [5, с. 151-177].

Рәт һандары. Рәт һандарының билдәлелек нигеҙе *ын, н* элементы менән яһала: *алты-н, ете-н, бер-ен, уны-ын, туғыҙ-ын* һ.б. Шул нигеҙгә боронғо төрки телендәге *ч* элементы ҡушылған: *берин-ч, икин-ч, алтын-ч, онын-ч*. Тарихи яҡтан ҡарағанда, *ч* элементы күплек күрһәткесе булып тора. Быны беҙ тунгус-манжур телдәре материалында күрә алабыҙ, мәсәлән, нанай телендә, *огда* (кәмә) - *огда-ч* (кәмәләр).

Рәт һандары күплек идеяһы менән бәйләнгән. Бер генә әйберҙе рәт буйынса иҫәпләү мөмкин түгел. Рәт һандарында күплек күрһәткесенең булыуы тәбиғи күренеш тип ҡарарға кәрәк. Рәт һандарының аҙағына ҡушылған *ы, е* элементы (*алты-н-с-ы, бер-ен-с-е* һ.б.) айырыуса (выделительный) элемент

булып һанала. Икенсе төрлө әйткәндә, ул күп әйберҙәр араһынан билдәле берәүһен айырып күрһәтеүсе аффикс функцияһын үтәй. Әйберҙәрҙе һан яғынан айырып күрһәтеү бөтә төрки телдәрендә лә бар. Шул да мәғлүм булһын: алтынчы, биринчи һәм башҡа рәт һандарындағы иң аҙаҡтан килгән *ы, и* (*е*) айырыу элементы III зат эйәлек аффиксы менән бер сығанаҡтан (*алтынсы-һы*). Боронғо төрки телдәрендә рәт һандары биринч, икенч формаһында килһә лә *ы, и* элементы бөтөнләй булмаған тигән һүҙ түгел. Бер әйберҙе айырып күрһәткәндә ы, и элементы ҡуйылған булырға тейеш. Был хәлде яҡут теленең факттарынан да белеп була. Мәҫәлән, яҡут телендә рәт һандары нигеҙенә -*с, -ыс, -ис, -ус, -үс* элементы ҡушылған: *икки-икки-с* < *ики-ч, алта* - *алта-ыс* - *алтыс* (алтынсы), ә инде әйберҙе айырып күрһәткәндә шул формаға *ы, и* элементы өҫтәлә: *икки-һ-и* (икенсеһе). Боронғо төрки телдәрендә лә тап шундай хәл булған тип фараз итергә мөмкин: *алтынч-ы*.

Хәҙерге төрки телдәрендә *ы, и* элементы рәт һанының нигеҙенә бөтөнләй нығынып ҡалған, билдәлелек функцияһын юғалтҡан. Шуға күрә, бер әйберҙе башҡаларынан айырып күрһәткәндә, оҙонайған нигеҙгә тағы ла -*һы* (-*сы*) аффиксы өҫтәлгән: *алтынсы-һы, етенсе-һе, беренсе-һе* һ.б.

**Сама һандары**. Күпселек төрки телдәрендә сама һандары сифат ҡылым йәки хәл ҡылым ҡалыбы буйынса яһалған: *йөҙ-лә-гән, йөҙ-әр-лә-гән* һ.б. Икенсенән сама төшөнсәһе һандарҙың ҡабатланыу юлы менән дә белдерелә *биш-алты, ете-һигеҙ, утыҙ-кырк* һ.б.

## РӘҮЕШ

Ваҡыт рәүештәре. Урын рәүештәре кеүек ваҡыт рәүештәре төрлө телдә төрлөсә мәғәнә аңлата. Мәҫәлән, ертелде һүҙе ҡаҙаҡ телендә боронғо мәғәнәһен бирә (*ертелде бер шал бопты* - борон бер ҡарт булған), монголса ла шул уҡ мәғәнәне бирә: *эрт цаг* - боронғо заман. Был һүҙҙә *т* элементы урын-ваҡыт килеш ялғауы функцияһын үтәгән. Ләкин күпселек төрки телдәрендә -*т* аффиксы үҙенең урын мәғәнәһен юғалтҡан. Әйтәйек, *иртән* һүҙе сығанаҡ килеш ҡалыбы менән яһалған һәм шул ҡалып артабан дауам итә, сығанаҡ килеш ялғауы төбәү килеш формаһына ла (*иртәгә*) ҡушыла ала (*иртәгә-нән*). Сыуаш телендә -*ыр* тамырына төбәү килештең аффиксы туранан-тура ҡушыла һәм уға сығанаҡ килеш күрһәткесе -*н* өҫтәлеп килә: *ыр-а-н* (иртәгә). Ә инде, мари телендә был килеш тап башҡорт телендәгесә ҡалып менән яһалған (*эр-ла*), ләкин -*ла* аффиксы башҡорт телендә урын-ваҡыттың күрһәткесе, ә мари телендә ул килеш ялғауы булып йөрөй. Шулай уҡ беҙҙең телдә кис һәм кискә формалары бар, уларҙың тәүгеһендәге *ә* элементы боронғо төбәү килеш күрһәткесе булһа, икенсеһе -*кә* хәҙерге йәғни яңы төбәү килеш ялғауын функцияһын үтәй. Йәнә лә сағыштырығыҙ: сыуашса *каҫ* (кис) - *каҫ-па* (кис менән), *ӗҫер* (кисә); яҡутса *бэг-дэһэ* (кисә) - башҡортса бөгәсә йәки бөгөн төндә һүҙе менән оҡшаш булһа кәрәк.

Бөтөн төрки телдәрендә *кышын, яҙын* тибындағы ваҡыт рәүеше бар. Был тик сыуаш телендә генә юҡ, унда ул *ҫуркунне* (яҙын, яҙ көнө) булып йөрөй. Хакас телендә *кыш, яҙ, йәй* һүҙҙәре башҡасараҡ формала йөрөй: *хысхы, часхы, кэскэ, чайхы* (ҡышҡы, яҙғы, көҙгө, йәйге) йәғни исем нигеҙенә әйләнгән. Ә *кышын, яҙын* формаһы ниҙән килеп сыҡҡан? Был һорауҙарға яуап бирер

алдынан миҫалдарға иғтибар итәйек:

| | |
|---|---|
| башҡорт телендә | хакас телендә |
| ҡыш-ы-н | хысхы-зы-н |
| яҙ-ы-н | часкы-зы-н |
| ат-ы-н | ада-зы-н |

Исем ҡалыбы буйынса яһалған был типтағы рәүештәр көньяҡ төрки телдәрендә *кышыны, яҙыны* формаһында булырға тейеш. Ләкин *ҡышын, яҙын* формаһы иҫемдәрҙән рәүеш булып айырылғас, уға *ы* элементы ҡушылмаған, сөнки рәүештәр мәғәнә яғынан ныҡ изоляцияға бирелгән. Был - бер. Хәҙер, икенсенән, *кышын, яҙын* бик боронғо форма ул. V-VIII быуаттағы боронғо төрки яҙмаларында ла осрай ул. Әйтәйек, ул форма төрки ҡәбиләләренән беҙҙең эраға тиклем айырылып киткән яҡут телендә лә бар: *ҡыһын* (ҡышын), *сааһын* (яҙын). Ярар, *ҡышын, яҙын* тибындағы рәүештәр урыҫ телендәге *зимой, весной* рәүештәренә тап килгән. Ә зимой, весной формаһы сығанаҡ килештән яһалған. Быны шунан сығып тюркологтар үткән быуатта уҡ боронғо төрки телдәрендә *ҡышын, яҙын* тибындағы творительный (йәғни сығанаҡ) килеш булған тип раҫлайҙар. Был ҡараш тюркология фәнендә әле лә йәшәй. Ул килеште әле лә творительный, инструментальный килеш тип баралар. Ләкин асылда киңерәк структур анализ нигеҙендә шулай килеп сыға: *ҡышын, яҙын* тибындағы рәүеш билдәле төшөм килештән яһалған. Үрҙә хакас теленән килтерелгән миҫалдарҙан был асыҡ күренә. Хатта ҡайһы бер уғыр-фин телдәрендә лә хәл ана шулай тора. Мәҫәлән, мари телендә билдәле төшөм килештең аффиксы *-м*: *мый книга-м будам* (мин китапты уҡыйым), *теле* (ҡыш) - *телым* (ҡышын). Был типтағы ваҡыт рәүештәренең төрки телдәрендә күплек формаһы ла бар: *йәйҙәрен, ҡыштарын.*

Ике һүҙҙән яһалған ваҡыт рәүештәре лә бар *быйыл, бөгөн*. Ә инде *паян* (бөгөн) формаһы фәғәт сыуаш теле өсөн генә хас. Ул һүҙ башҡорт телендәге *бая* һүҙе менән бер тамырҙан булырға мөмкин. Шулай уҡ *былтыр* һүҙе күпселек төрки телдәре өсөн характерлы. Профессор Н.К. Дмитриев был һүҙҙе бер йылдыр тип төшөндөрә [6, 125 -се б.].

Ләкин ул һүҙҙең яҡут телендә былыр тигән боронғо формаһы бар. Был һүҙҙең аҙағындағы *р* элементы билдәһеҙлекте белдерә.

**Урын рәүештәре**. Был тәңгәлдә шуға иғтибар итергә кәрәк: *шунда, бында* тибындағы урын рәүештәре күрһәтеү алмаштарының урын-ваҡыт килеш формаларынан айырыла. Был типтағы рәүештәр фәҡәт урынды ғына белдермәй, ә йүнәлеш мәғәнәһен дә аңлата, улар киң мәғәнәне эсенә алған. Бөтә урын рәүештәре килеш аффиксы ҡалыбы менән яһалған, мәҫәлән, *электән, алыҫтан, йыраҡтан* һ.б. Урын рәүештәренең килеш ҡалыптары менән яһалыуын төрки телдәрендә генә түгел, ә башҡа урал-алтай телдәрендә лә күҙәтеп була.

**Алмаш-рәүештәр** (местоименные наречия). Төрки телдәрендә алмаш-сифаттар менән бер ҡатарҙан алмаш-рәүештәр ҙә бар. Мәҫәлән, *шулай, былай, улай, алай* һ.б. рәүештәр сифат функцияһында килмәй, сөнки улар - алмаш-рәүештәр. Ә инде *шундай, былдай* тибындағы һүҙҙәр алмаш-сифаттар булып

һанала. Ләкин уларҙың икеһе лә (мәҫәлән, *шулай, шундай*), хәҙерге телдең фонетик законлылыҡтарына буйһоноп, боронғо төрки телендәге шулаг, шундаг формаларынан барлыҡҡа килгән.

## СИФАТ

Морфологик категория булараҡ, сифаттың төп функцияһы бер предметты икенсеһе менән сағыштырыуға ҡайтып ҡала. Ғәҙәттә, телселәр сифаттың *-раҡ /-рәк* аффикслы формаһын ғына сифат һүҙ төркөмөнөң сағыштырыу дәрәжәһе тип йөрөтәләр. Сағыштырыу тигәндән шуны аңларға кәрәк, ул әйбер билдәһененең күбәйеүен белдерә. Шуға күрә уның аффиксы составында күплек күрһәткесе бар. Мәғәнәһе яғынан сифаттың сағыштырыу формаһы статиканан динамикаға күсеүҙе аңлата. Мәҫәлән, *якшы* сифаты предметтың бер үк торошон, йәғни статиканы, аңлатһа, *якшы-р-ак* формаһы сифаттың, йәғни билдәнең, үҫешен - динамикаһын белдерә. Сифаттың сағыштырыу дәрәжәһе бөтә исем һүҙ төркөмдәре, хатта ҡылым өсөн дә хас күренеш (мәҫәлән, *ҡарабырак* тора һ.б.).

Төҫтө аңлатҡан сифаттарҙың аҙһытыу йәки күбәйтеү формаһы сикләнгән рәүештә ҡулланыла, мәҫәлән: *йәшкелт, ҡыҙғылт*. Ә инде ҡайһы саҡта ундай формаларға *т* элементы ҡушылмай: *йәшкел, ҡыҙғыл*. Тағы ла шуны әйтергә кәрәк: *-лы, -ле* аффиксы менән яһалған сифаттар көнбайыш төрки, шул иҫәптән ҡыпсаҡ телдәре өсөн генә характерлы.

Хакас, тува, тор телдәрендә *-лы, -ле* аффикслы сифаттар юҡ, уларҙа фәҡәт *-лыҡ, -лек* аффикслы сифаттар ҡулланыла. Мәҫәлән туваса - *аъттыг, куштуг, дустуг, суттуг*; хакасса - *аттыг, кэстiг, тустығ, сэттiг*; шорса - *аттыг* (атлы), *кэштэг* (көслө), *тустуг* (тоҙло), *сэттэг* (һөтлө). Әйтергә кәрәк, *-лы, -ле* аффикслы сифаттарҙан артабанғы форма обладательный килеш яһалған. Ә инде *-ғы, -ге* аффикслы сифаттар һәм уларҙың *-ғы, -ге* аффиксы, тарихи яҡтан ҡарағанда, билдәле төшөм килеш аффиксы аңлатҡан мәғәнә лә булырға тейеш (мәҫәлән, *ауылдағы, урындағы*). Шуға күрә *ҡышкы, йәйге* тибындағы сифаттар конкрет әйберҙе белдерә. Ә бына *-ғы, -ге* аффикслы рәүешле билдәле төшөм килеш формаһы хәҙерге монгол телдәрендә бар. Ундай форма хәҙерге төрки телдәрендә лә бар, тик аффиксы *-йы, -йе* рәүешендә килә, мәҫәлән: *одайы* (< *одағы*) - бүлмәне мәғәнәһен бирә. Шул рәүешле *атағ* һүҙе хәҙерге башҡорт телендә *атау* (асыҡлыҡ) булып киткән.

## ҠЫЛЫМ

Төрки телдәрендә ҡылым формаларының бөтәһенә лә тулыһынса баһа бирелгәне юҡ. Был шунан килә: XIX быуатта, хатта хәҙерге көндә лә төрки телдәренең грамматик төҙөлөшөнә Европа телдәре күҙлегенән ҡарау тенденцияһы бар. Был хәл бер ни тиклем дәрәжәлә әлеге көндә лә дауам итә. Быны шунан күреп була: ҡайһы бер тюркологтар ҡылымдың билдәле һәм билдәһеҙ үткән заман формаларын бар тип тапмайҙар. Һәм был заман формаларын Европа телдәрендәге термин менән перфект һәм имперфект тип атайҙар. Был терминдар хатта Н.К. Дмитриев, Б.А. Серебренников кеүек күренекле ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә лә осрай [7, 168 - 177; 9, 315]. Түбәндәге миҫалдарға иғтибар итегеҙ:

Jch las (мин уҡыным) - имперфект

Jch habe gelesen (мин уҡығанмын) - перфект

Был традиция, йәғни төрки телдәрендәге шаһитлы һәм шаһитһыҙ заман формалары перфект һәм имперфект тип атау, XIX быуатта үҫкән һәм сәскә атҡан классик тюркологиянан килә. Әлеге көндә лә шул традицияны һаҡлау күҙәтелә. Ләкин төрки телдәрендәге шаһитлы һәм шаһитһыҙ үткән заман формалары имперфект һәм перфект тигән үткән заман формаларына бөтөнләй тап килмәй. Йәғни Европа телдәрендә ҡабул ителгән термин төрки телдәрендәге заман формаларының эстәлеген бирә алмай. Был тәбиғи хәл. Сөнки төрки телдәре бөтөнләй башҡа типологияға ҡараған телдәр төркөмөнә инә. Икенсе төрлө әйткәндә, агглютинатив һәм сингармонизмлы телдәр улар. Иҫке традицияны боҙмайынса, төрки телдәренең заман формаларына Европа телдәре күҙлегенән ҡарау арҡаһында *алды, килде* тибындағы шаһитлы үткән замандың килеп сығыуы ошо көнгәсә тиклем асыҡланғаны юҡ.

Тюркологияла *алды, килде* тибындағы шаһитлы үткән замандың килеп сығышы тураһында хәҙер инде ике быуатҡа яҡын бәхәс бара. Ә*, алған, килгән* тибындағы шаһитһыҙ үткән заман тигәнгә килһәк, тюркологияла быны нәтижәле (результатив) үткән заман тип ҡарайҙар. Был терминды татар телселәре мәктәп дәреслектәренә индергәндәр. Күпселек тюркологтар ҡылымдың был заман формаһын шул термин менән атайҙар. Рус телендәге прошедшее результативное время тигән термин Европа телдәренән алынған. Мәҫәлән, немец телендә ике төрлө пассив формаһы бар: тулы пассив һәм тулы булмаған пассив. Тулы булмаған пассивты прошед-ший результативный пассив тип атайҙар. Миҫалдарға иғтибар итегеҙ:

1. Полный пассив настоящего времени:

а). Das Haus Wird gebaut (дом строится)

б). Das Haus Wirde gebaut (дом строился)

2. Краткий или результативный пассив:

а). Das Haus ist gebaut (дом построен)

б). Das Haus war gebaut (дом был построен)

Шулай итеп, *алған, килгән* тибындағы үткән заман формаһы шаһитһыҙлыҡты белдерә. Эш-хәрәкәттең үтәлешендә кемдер берәү шаһит булмаған тигән аргументҡа тюркологтар шундай һорау ҡуя: ни өсөн был заман формаһы 1 затта ла ҡулланыла? Үҙенең эшләгән эшенә I зат ни өсөн шаһит булмаҫҡа тейеш? Әйтергә кәрәк, шаһитһыҙ үткән замандың төрлө мәғәнә биҙәктәре бар. Шуларҙың береһе модаль мәғәнә тип атала. Тимәк, *алған, килгән* тибындағы үткән заман формаһы модаль мәғәнәлә ҡулланыла. Мәҫәлән: *китабымды онотҡанмын* (оказывается я забыл книгу). Шуға күрә төрки телдәрендә *китабымды оноттом* тип һөйләү дөрөҫ түгел.

Ҡылым формаһының үҫешенә килгәндә, уларҙы ике төркөмгә айырып өйрәнеү уңайлы. Ҡылымдарҙың ике төрө бар: а) тартынҡы нигеҙле: *ал, кил, бар*; б) һуҙынҡы нигеҙле: *уҡы, башла, эшлә, таны, йөрө*. Һуңғыһында ҡылымдың тамыры *йөрө, йөрө, уҡы* һәм *башла, эшлә* нигеҙ ҡылымдарының тамыры *баш, эш* булып йөрөй. Ҡылымдарҙың тамыры йәки нигеҙе бөтә төрки телдәрендә лә II зат формаһы менән тап килә. Мәҫәлән: *ал* (бери, возьми). Беренсенән, быһың сәбәбен дөйөм төрки телдәрен һәм ғөмүмән, урал-алтай

телдәрен сағыштырып ҡына белергә мөмкин. Урал-алтай телдәренең байтағында, мәҫәлән, тунгус-манжур һәм Балтик буйы фин телдәрендә, ҡылым бойороҡ формаһына килгәндә, тура тултырыусы фәҡәт төшөм килештә генә тора. Бынан сығып шундай фекергә килеп була: II зат бойороҡ формаһы (берлектә) билдәһеҙлек төшөнсәһе менән бәйләнгән. Ысынлап та, бойороҡ формаһы үҙенең эстәлеге яғынан һөйләү моменты менән хәрәкәттең үтәлеү моменты тап килеүҙе белдерә. Хәрәкәттең үтәлеше һәр ваҡыт киләсәк заманда аңлана. Мәҫәлән, *ал - алығыҙ, уҡы - уҡығыҙ* тигән форманың мәғәнәһе, үтәлеше шунда уҡ һөйләү барған моментта хәл ителмәй.

Бойороҡ формаһы белдергән эштең үтәлеше, киләсәк заманға күсерелеп, билдәһеҙлекте аңлата, йәғни ул форма билдәһеҙлек идеяһы менән бәйләнгән. Был идея менән ҡылымдың киләсәк заман формаһы ла бәйләнгән. Шуға күрә тунгус-манжур-телдәрендә (мәҫәлән, эвенк һәм эвен телдәрендә) ҡылым киләсәк заман формаһында торһа, тура тултырыусы билдәһеҙ төшөм килештә генә килә.

Икенсенән, төрки телдәренең күбеһендә киләсәк заман формаһы билдәлелек күрһәткесе булған *р* элементы менән яһала, мәҫәлән: *алыр, барыр, башлар* һ.б. был заман формаһы, ғөмүмән, билдәһеҙлекте белдерә, һәм шуға күрә ул билдәһеҙ киләсәк заман тип атала. Ул форма эште, хәрәкәтте дөйөмләштерә һәм һәр ваҡыт өсөн характерлы хәрәкәтте белдерә. Был хәл төрки телдәренең халыҡ мәҡәлдәрендә бик асыҡ сағыла. Мәҫәлән, *ялҡау ултырып эшләр, ятып ашар* тигән мәҡәлдә ул ялҡауға хас булған хәрәкәттәр бөтәһе лә дөйөмләштерелә. Шуға күрә халыҡ мәҡәлдәрендәге был форманы -*сак, -сәк, -чак, -чәк* аффикслы киләсәк заман формаһы менән алмаштырып булмай. Сөнки -*чак, -чәк* аффикслы киләсәк заман формаһы билдәлелек идеяһы менән бәйләнгән. Ул алда эшләнәсәк эшкә ышаныс ныҡ булыуҙы белдерә.

*Ал, кил, уҡы, башла* тибындағы бойороҡ формаһы, билдәһеҙлек төшөнсәһе менән бәйләнгәнгә күрә, бер ниндәй аффикс ҡабул итмәй. Ә инде билдәһеҙлек идеяһы менән форма ғәҙәттә аффиксһыҙ була.

Төрки телдәрендә төшөм килеш менән бергә билдәһеҙ төшөм килеш бар. Сыуаш телендә билдәһеҙ үткән заман формаһы бер ниндәй зат ялғау ҡабул итмәй. Сағыштырығыҙ:

эпӗ (мин)
эсӗ (һин)
вӑл (ул)
эпир (беҙ) } вулӑ - на (уҡыған)
эсир (беҙ)
вӗсем (улар)

Балтик буйы фин телдәрендә лә шул уҡ хәл: шаһитһыҙ үткән заман формаһы зат аффикстары ҡабул итмәй, йәғни тап сыуаш теленең структура ҡалыбы кеүек.

Төрки телдәрендә (мәҫәлән, башҡорт, татар) шаһитһыҙ үткән заман формаһы зат аффиксы ҡабул итмәгән хәлдәр бар, ләкин уның мәғәнә биҙәге

башҡаса. Ул модаль мәғәнә, йәғни ҡылым рәүешлеге, менән бәйләнгән. Шаһитһыҙ үткән заман билдәһеҙлекте белдергәнгә күрә, күпселек төрки телдәрендә III зат күплек аффиксы ҡабул итмәй.

Ғөмүмән, ҡылым формалары, йәғни ҡылымдарҙың III зат күплек формаһы, күплек аффиксын ҡабул итмәҫкә мөмкин, мәҫәлән: *улар килде, улар килгән* һ.б. Сөнки III зат ситуацияға ҡатнашыусы ситтәге зат һанала. Шуның өсөн дә төрки телдәрендә ҡылымдарҙың III зат формаларында бер ниндәйҙә зат аффиксы юҡ. Мәҫәлән:

| **Берлектә:** | **Күплектә:** |
|---|---|
| мин ал-а-м | беҙ ал-а-быҙ |
| һин ал-а-һың | һеҙ ал-а һы-ғыҙ |
| ул а-ла | улар а-ла |

Миҫалдарҙан күренеүенсә, *-а* аффиксы ҡылымдың нигеҙен яһаусы элемент булып һанала. Тағы ла миҫалдарға күҙ һалайыҡ:

| **Ҡылым формаларында:** | **Исем формаларында:** |
|---|---|
| алд-ы-м | ат-ы-м |
| алд-ы-ң | ат-ы-ң |
| алд-ы | ат-ы |

Икеһендә лә нигеҙ яһаусы элемент *-ы* күрһәткесе менән бирелгән. Тимәк, нигеҙ яһаусы ҡалып ҡылымдарҙа ла, исемдәрҙең эйәлек формаларында ла бер төрлө. Әйтәйек, ат-ы-м, ат-ы-ң, ат-ы формаларында -ы зат аффикслы түгел, ә нигеҙ элементы булып йөрөй Икенсе төрлө әйткәндә, ул - билдәлелек элементы, йәғни билдәле төшөм килеш аффиксы.

ӘҘӘБИӘТ


1. Киекбаев Ж.Г. «Основы исторической грам-матики урало-алтайских языков. Уфа Китап, 1996. С. 190-191.
2. Шунда уҡ. 255-256-се бб.
3. Дмитриев.Н.К. Башҡорт теленең грамматикаһы. Өфө: Башгосиздат, 1950. 93 -сө б.
4. Марр.Н.Я. Кавказские племенные названия и местные параллели. Петроград, 1922. С. 15.
5. Киекбаев Ж. Г. Основы исторической грам-матики урало-алтайских языков. Уфа. Китап, 1996. С. 151-177.
6. Дмитриев Н. К. Башҡорт теленең грамматикаһы. Өфө: Башгосиздат, 1950. 125-се б.
7. Дмитриев Н.К. Шунда уҡ. 168-171-се бб.
8. Серебренников Б.А. Система времени татар-ского глагола. Казань, 1963. С. 28-31.

9. Грамматика современного якутского лите-ратурного языка. Фонетика и морфология / Под. Ред. Убрябовой Е.И. М.: Наука, 1982. С. 315.

Учебное издание

Азнагулов Рафаил Гайнитдинович

Лекции Джалиля Киекбаева
(По курсу “Сравнительная грамматика тюркских языков”)